✓ *Әсмә, кешем! Әсмә, дуҫым! Әсмә берүк!*
*Әскелектең һаҙлығына төшмә берүк!*
*Әскелек ул - иманһыҙлыҡ ғәләмәте,*
*Иманһыҙлыҡ юлына һин күсмә берүк!*
*Рәшит ШӘКҮР.*

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

25 - 31 АВГУСТ (УРАҒАЙ) 2012 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№34 (504)

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Баш ҡалаға...**

инженерҙар кәрәк



4

**Ҡыңғыртау сере**



7

**"Урал батыр" нәфис фильмын төшөрөү...**



8-9 һәр башҡортҡа ун һумға ғына төшәсәк

**Шаулы сауҙа...**

бурҙы йәшерер



12

14 ТВ-программа

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Яңы мәғариф стандарттарында туған телдәрҙе уҡытыуға ниндәй урын бирелә?

***Рәйсә КУЗБӘКОВА, Башҡортостан Республикаһы Мәғариф министрлығының милли мәғариф һәм төбәк хеҙмәттәшлеге бүлеге начальнигы:*** РФ Мәғариф һәм фән министрлығы мәғариф стандартының бер нисә вариантын тәҡдим итә. 1-се вариант - яңы стандарт - туған тел өйрәнеү ҡаралмаған мәктәптәр өсөн; 2-се вариантта туған тел өйрәнеү ҡарала һәм уның өсөн I-IV кластарҙа 3-әр сәғәт бирелә. 3-сө вариант: уҡытыу тулыһынса туған телдә алып барылған мәктәптәр өсөн уҡыу планы, йәғни был электән килгән милли компонент. Күренеүенсә, Рәсәй Федерацияһы үҙе үк милли мәктәптәрҙе һаҡлау сараһын күреп, беҙгә ошондай уҡыу пландары төшөрә. Милли мәктәптәр өсөн электән килгән махсус уҡыу планы бар, уның буйынса туған телдәрҙе өйрәнеүгә 4, 5, хатта 6 сәғәт ҡаралған. Бәхеткә күрә, Рәсәй Мәғариф һәм фән министрлығы законда яҙылғандарҙы һаҡлап килә һәм үтәй.

Ошо стандарттарға нигеҙләнеп, беҙҙең министрлыҡ та дүрт уҡыу планы вариантын төҙөп, мәктәптәргә тәҡдим итә: 1) уҡытыу фәҡәт рус телендә алып барылған рус мәктәптәре өсөн; 2) туған телдәрҙе өйрәнеү ҙә ҡаралған рус мәктәптәре өсөн. Йәғни, дөйөм уҡытыу рус телендә алып барылһа ла, унда уҡыған төрлө милләт вәкилдәре туған телен өйрәнә ала; 3) башҡорт мәктәптәре өсөн; 4) башҡа төр мәктәптәр өсөн. Беҙҙең министрлыҡ тарафынан да туған телде өйрәнеү өсөн шарттар тыуҙырылған. Бөтә проблема шуға ҡайтып ҡала: мәктәптәр ниндәй уҡыу планын һайлауҙы ирекле хәл итә, үҙҙәре һайлай. Ләкин был, мәсьәләне директор йә булмаһа завуч үҙе генә хәл итә, тигәнде аңлатмай әле. Уҡыу планы йәмәғәтселек, ата-әсәләр һәм уҡыусылар менән берлектә һайланырға тейеш. Бында инде беҙҙең ата-әсәләрҙән граждандыҡ бурысын алға ҡуйып, әүҙемлек күрһәтеү талап ителә. Туған телгә битараф булмаһалар, уны һаҡларға һәм өйрәнергә кәрәк, тип иҫәпләһәләр, шуға ярашлы план һайлана, ә инде рус теленән башҡа телдәрҙең кәрәге юҡ, тигән ҡараашта торһалар, ул ваҡытта, дөрөҫөн әйтергә кәрәк, туған телдәр яҙмышына туранан-тура ҡурҡыныс янай.

Әйтеп китеүемсә, күп нәмә йәмәғәтселеккә, ата-әсәләргә бәйле. Был тәңгәлдә беҙ үҙ һүҙебеҙҙе асыҡ итеп әйтергә тейешбеҙ, сөнки күптәр аңлап та етмәйҙер: фәҡәт рус телен генә һайларға, тип ҡысҡырыусылар бик хаталана. Сөнки урындағы милли телдәр рус теле менән үҙ-ара тығыҙ бәйләнеп, бер-береһенә үрелеп үҫә һәм йәшәй. Үҙегеҙ ҙә күреп тораһығыҙ: бөгөн дөйөм аралашыу мөхитендә инглиз теле өҫтөнлөк ала бара. Һуңғы 10-15 йыл эсендә рус телендәге әүҙем ҡулланылышҡа 1500-ҙән ашыу инглиз һүҙҙәре, терминдары килеп инде. Ә инде тағы ла берәй ун йылдан рус телендәге дөйөм аралашыу даирәһен сит тел баҫып алмаҫ тип кем гарантия бирә? Балалар Пушкинды, Толстойҙы төп нөсхәһендә уҡый ҙа, аңлай ҙа алмаясаҡ бит! Тимәк, рус теле лә йотолоу ҡурҡынысы алдында. **Туған телебеҙҙе һаҡлайбыҙ, тип, беҙ бер үк ваҡытта рус теленең йәшәүе өсөн дә тырышабыҙ. Милли телдәр йәшәй икән, тимәк, рус теле лә йәшәйәсәк.** Икенсенән, бала знактар системаһы булған телдәрҙе күберәк белгән һайын, уның аҡыл ҡеүәһе, интеллекты яҡшыраҡ үҫешә бара. Өсөнсөнән, милли мәктәптәрҙә уҡыған балалар тәрбиәле, иманлы була, сөнки улар үҙ милләтенең мәҙәниәтен, тарихын өйрәнеп, туған телендә аралашып, ерлектәге йола-традициялар, халыҡ педагогикаһы нигеҙендә тәрбиә ала. Бына ошо хаҡта аңларға кәрәк ата-әсәләргә. Улар араһында туған телдәр уҡытыу буйынса фекер айырмалыҡтары булырға ла тейеш түгел. Туған телдәрҙе уҡытыу рус теле менән бер рәттән дәүләт федераль стандартына индерелгән икән, унан баш тартыу мөмкин түгел.

***Фәнзил САНЪЯРОВ, БДУ уҡытыусыһы, филология фәндәре кандидаты, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының милли мәғариф комиссияһы рәйесе:*** Рәйсә Абдрахман ҡыҙының һүҙҙәрен ҡеүәтләп, шулай тип өҫтәр инем: Өфөлә, Башҡортостандың башҡа ҡалаларында, район үҙәктәрендә ата-әсәләр кәңәшмәһеме, съезымы - ҙур форум үткәреп, әлеге мәсьәлә тураһында һөйләшеү үткәреү күптән кәрәк ине. **Шул уҡ ваҡытта мин "дилбегәне" фәҡәт ата-әсәләр, уҡытыусылар йә мәктәп директорҙары ҡулына ғына тапшырып ҡуйыуҙы ла хуплай алайым, сөнки был етди мәсьәләгә иң тәүҙә дәүләт кимәленән тороп һүҙ әйтеү ҙә талап ителә.**

Уҡыу планының ниндәйерәк вариантын һайлау маҡсатҡа ярашлыраҡ булыры тураһында министрлыҡ кимәленән һүҙ әйтелергә, кәңәш, тәҡдим индерелергә тейеш. "Дәүләт функцияһы" тигән нәмә лә бар бит әле. Мәғариф өлкәһенә беренсе сиратта йәмәғәтселек, ата-әсәләр түгел, ә дәүләт үҙе идара итә. Белем биреү принциптары мәғариф тураһындағы законға, илебеҙҙең төп законы - Конституцияның ошо өлкәгә ҡағылышлы положениелары нигеҙендә бойомға ашырыла. Шулай булғас, БР Мәғариф министрлығы телдәр уҡытыу мәсьәләһенән ситтә ҡалырға тейеш түгел.

Унан һуң, башҡорт мәктәптәрендә белем алыу, минең күҙаллауымса, ике йүнәлештә алып барылырға тейеш: беренсе баҫҡыс - 1-5 кластарҙа бөтә предметтар ҙа саф башҡорт телендә уҡытылһа, өлкән кластарҙа, йәғни, 9, 10, 11 кластарҙа физика, химия, математика кеүек аныҡ фәндәр - русса, ә тарих, тел, әҙәбиәт кеүек гуманитар предметтар башҡорт телендә алып барылһа, маҡсатҡа ярашлыраҡ булыр ине, тип уйлайым. Юғиһә, беҙҙең балалар телендә хәҙер күп һүҙҙәрҙең башҡортса тәржемәһе юҡ, мәҫәлән, ҡарағатты - смородина тип, дөгөнө рис тип беләләр. Бындай бутауҙар оло-лар теленә лә күсте. Радио-телевидениела интервью биреүселәрҙе тыңлап тороуы ҡыйын: ике һүҙҙең береһе - русса. Бына шундай тел бысраныуы, сүпләнеүе башҡорт теленә генә түгел, бар телдәргә лә "йоғоп" өлгөргән, был бигерәк тә рус теленә янай. Шуның өсөн башҡа телдәргә ҡаршы көрәшкәнсе, үҙ туған телендең сафлығына, ул телдә балаларындың һөйләшеүенә өлгәшеү өсөн көрәшергә кәрәк.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**



ӘЙҘӘ, АҠСА ЭШЛӘЙЕК!

# ЙӘЙГЕ ШӨҒӨЛ



**Быйылғы яҙҙың үтә лә йылы килеүе йәйҙе лә тиҙләтте һәм баҡсала ғына түгел, ә урманда ла еләк-емеште тиҙ өлгөрттө. Турғай еләген йыйып бер ҡыуанғайныҡ, шунан инде ер еләге лә беште.**

Еләк уңған йылда мин уны йыйып һатып, аҡса эшләгәс кенә, үҙемә ҡышҡылыҡҡа ҡайнатмалар әҙерләйем. Быйыл да еләк ҡыҙарып бешкәс үк балалар менән урманға йүнәлдек. Күмәк эш ырамлы бит ул, "һә" тигәнсе ҙур биҙрәләребеҙҙе эре-эре еләктәр менән тултырып та ҡуйҙыҡ. Беҙҙә, ҡайһы бер райондарҙағы кеүек, йыйылған еләк-емеште һатыу менән ҡатмарлыҡтар юҡ. Баш ҡала яҡын булғас, тиҙ генә барып етәбеҙ һәм һатып та ҡайтабыҙ. Күптәр еләген Үҙәк баҙар янында һатыуҙы хуп күрһә, мин иһә Телеүҙәк эргәһендәге магазин алдында "төпләнәм". Быйыл да аҡса эшләү сезонын өйрәнгән урында асып ебәрҙем. Бында ла, Үҙәк баҙарҙағы кеүек үк, кеше күп һәм, иң ҡыҙығы, һатып алыусылар, башҡа ерҙәге һымаҡ һайланып, бәйләнеп тормай, ә бер һүҙһеҙ һатып ала китә. Бигерәк тә эш сәғәте бөтөүгә ҡарай килеп торһаң, еләгеңде тиҙ генә һатып ебәрергә мөмкин.

Еләктең килограммын 200 һумға тәҡдим иттем быйыл. Һатып алыусыларҙы оҙаҡ көтөргә тура килмәне, сират тороп алып бөтә инеләр. Һутлы, бешкән, эре еләктәр күҙҙе ҡыҙҙырып ҡына яталар шул, бер күҙ һирпеү менән ауыҙға ҡапҡы килә. Барыһының да урманға барып еләк йыйып йөрөү мөмкинлеге юҡ, ә ҡышҡы һалҡын кистәрҙә хуш еҫле еләк ҡайнатмаһы менән сәй эске килә. Шуға күрә кемдер еләкҡә махсус заказ биреп тә ебәрә. Минең өсөн был тағы ла уңайлыраҡ, сөнки йыйған еләгеңде алып килгәс үк һатып ебәреүеңде беләһең.

**Шулай итеп, йәйге уңышты һәм муллыҡты файҙаланып, арыу ғына аҡса эшләп ҡалдым быйыл да. Был аҡса өйгә кәрәк-яраҡ алыуға, балаларҙың өҫтөн бөтәйтеүгә тотонола. Шулай уҡ көндәлек тҡланыу өсөн дә арыу ғына аҡса кәрәк бит һәм был осраҡта еләктән килгән аҡса бик тә ярап ҡала.**

**Нурия СӘЙФЕТДИНОВА.**
**Нуриман районы.**

# ҠУЛЫҢ ЭШ БЕЛҺӘ...

**Әбйәлилдән Баймаҡ районы ауылдарының береһенә килен булып төшөүемә оҙаҡ йылдар үтте. Хәҙер балалар үҫеп етеп, һәр береһе үҙаллы тормош ҡорҙо. Ике район араһы яҡын ғына булһа ла, тыуған ерҙәр һағындырып иҫкә төшөп-төшөп ала. Ауылымдың ҡайынлы урмандарын, еләкле яландарын, ауылдаштарымды, балалыҡ дуҫтарымды һәр көн иҫләйем. Һағыныу хистәрен баҫыу өсөн тыуған яғымда әҙерләнгән аш-һыуҙы йыш бешерәм.**

Йыш ҡына күрше-күләнде лә "әбйәлилдәрсә" әҙерләнгән аш-һыу менән һыйлап ҡыуандырам. Аш-һыу исемдәре бер төрлө булһа ла, уны әҙерләүҙә һәм табынға ултыртыуҙа, ҡунаҡ һыйлауҙа ике күрше район араһында айырмалыҡтар күп.

Шулай бер көн тыуған яғыма ҡайтҡанда ҡустәнәс итеп апайымдың тәмле, күпереп торған буҙаһын алып ҡайттым. Мин йәшәгән ауылда буҙа эшләмәйҙәр һәм алып килгән ҡустәнәсем тәмләп ҡараусыларҙың барыһына ла бик оҡшаны. Күптәр буҙа ҡойоп биреүемде һорап өйгә килде. Әлбиттә, ҡыуанып риза булдым. Торабара баҙар заманында йәшәүебеҙҙе иҫләп, буҙаны һата ла башланым. 1,5 литр тәмле лә, танһыҡ та эсемлекте 50 һумға алырға теләүселәр бихисап, ҡайһы саҡта өлгөрә алмай киткән саҡтар була. Шулай итеп, буҙа эшләп һатып, ауыл халҡын бер ҡыуандырһам, бер аҙ аҡса эшләп, үҙем дә шатланам.

Минең миҫалым, бәлки, төрлө ергә килен булып төшөүселәргә үҙҙәренең район, ауылдарында бешерелгән, был яҡтарҙа ят булған аҙыҡ-түлек ярҙамында бер аҙ аҡса эшләргә булышлыҡ итер.

**Миләүшә СӘЛИМОВА.**

"КИСКЕ ӨФӨ"ГӘ - 10 ЙЫЛ

# ДӘРЕСТӘ ФАЙҘАЛАНАМ...

**Тәүләп нәшер ителә башлаған көндәрҙә үк килеп еткәйне беҙгә "Киске Өфө"нөң даны, ләкин ул саҡта беҙ был гәзит фәҡәт баш ҡалабыҙҙа ғына тарала икән тип уйлап, яҙыла алмайынса йөрөнөк.**



Күп тә үтмәй, ауыл халҡы, мәктәп уҡыусылары менән осрашыуға уның журналистары килеп киткәс, "Киске Өфө" менән ҡыҙыҡһыныуыбыҙ тағы ла арта төштө һәм беҙ уға шундуҡ яҙылып, киләһе айҙан алдыра ла башланыҡ. Шунан алып уға йыл һайын яҙылам. Яратып уҡыйым, тип әйтеү генә аҙ, мин уның һәр һанын ҡәҙерләп йыйып барам, сөнки материалдарын дәрестәремдә, класс сәғәттәрендә файҙаланам, ата-әсәләр йыйылыштарында матур, өлгөлө ғаиләләр хаҡындағы мәҡәләләрҙе бергәләп уҡып, фекер алышабыҙ.

Үҙем ижад донъяһына битараф түгелмен, ҡәләмемде һынап ҡарайым: "Ағиҙел", "Шоңҡар" журналдарында хикәйәләрем баҫылып сыҡты. Шуға күрә "Киске Өфө"нө ҡулыма алыу менән, ниндәй яңы авторҙың ниндәй әҫәрен баҫтылар икән, тип тиҙ генә "Ҡомар" рубрикаһын ҡарай һалам. Шуныһы һәйбәт: байтаҡ яңы исемдәр асты "Киске Өфө", әлеге рубрикала үҙенсәлекле, уҡымлы әҫәрҙәр генә һайлап баҫыла. Ислам донъяһы, мосолман әҙәбе хаҡындағы матералдар ҙа бер тынала уҡыла. Ҡыҫҡаһы, башҡа материалдары һәм, ғөмүмән, бөтә йөкмәткеһе менән "Киске Өфө" гәзите ғәйәт ҙур тәрбиәүи әһәмиәткә эйә, тип иҫәпләйем.

**Гөлдәр ӘХМӘҘИШИНА,**
**Баймаҡ районы Сосновка урта мәктәбе уҡытыусыһы.**

*ИҒТИБАР!*

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**Гәзитебеҙгә яҙылырға бер ваҡытта ла һуң түгел. Әгәр ҙә таныштарығыҙ араһында 2012 йылдың икенсе яртыһына "Киске Өфө"гә яҙылмай ҡалғандар булһа, әйтегеҙсе уларға: сентябрҙең 17-нә тиклем яҙылһалар, гәзитебеҙҙе октябрҙән алдыра башларҙар. Индекс - 50665.**



● Шулай уҡ июлдә, августа 2013 йылдың тәүге яртыһына гәзитебеҙгә яҙылған квитанцияларығыҙҙы редакцияға ебәрә алаһығыҙ. Китаптан да яҡшыраҡ бүләк юҡ, тип иҫәпләйбеҙ һәм ошо ике айҙа 2013 йыл өсөн яҙылған 4 уҡыусыбыҙға - **"400 башҡорт халыҡ йыры"**, 4 уҡыусыбыҙға - М. Әхтәмовтың **"Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәре"** китаптарын бүләк итәсәкбеҙ. Шулай итеп, индекс - 50665, ярты йылға яҙылыу хаҡы - **354 һум 24 тин**.

● Ә кемде бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә **тыуған көндәрен** хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

● **"Киске Өфө" - бүләгем"** акцияһы ла дауам итә. Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, атай-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

● **Иҫкәртеү.** Почталарҙа, киоскыларҙа гәзиткә яҙҙырыуҙан баш тарталар икән, йә яҙҙырған булып та, өйҙәрегеҙгә гәзитте алып килмәйҙәр икән, зинһар, редакцияға шылтыратып хәбәр итегеҙ.

Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**. Беҙҙең электрон почта: **info@kiskeufa.ru**. Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Йылайыр ауылының Беренсе май урамында 19 августа сыҡҡан ҙур янғын һигеҙ шәхси йортто һәм йорт алды ҡаралтыһын юҡҡа сығарған. Һөҙөмтәлә 22 кеше, шул иҫәптән ете бала йортһоҙ һәм мөлкәтһеҙ тороп ҡалған. Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов беренсе вице-премьер Рәүеф Ноғомановҡа ҡыҫҡа ваҡыт эсендә Йылайыр ауылының янғын арҡаһында торлаҡһыҙ ҡалған халҡы өсөн яңы йорттар төҙөргә ҡушты. Бынан тыш, янғындан зыян күреүселәр 30 мең һум күләмдә матди ярҙам аласаҡ.

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов ҡайһы бер райондарҙың һунарсылыҡ биләмәләрендә йәйге-көҙгө осорҙа һунар итеүҙе тыйыу тураһындағы бойороғона ҡул ҡуйҙы. Улар иҫәбендә - Әбйәлил, Асҡын, Баймаҡ, Балаҡатай, Белорет, Бөрйән, Ғафури, Дыуан, Ейәнсура, Йылайыр, Ишембай, Ҡариҙел, Ҡыйғы, Күгәрсен, Мәсетле, Нуриман, Салауат, Учалы, Хәйбулла райондары. Урман фондында БР Хөкүмәтенең 2012 йылдың 7 авгусындағы бойороғо менән индерелгән айырым янғынға ҡаршы режим бөтөрөлгәнгә тиклем һунар итеү тыйыла.

✓Халыҡ-ара төрки телле театрҙарҙың V "Туғанлыҡ" фестивале Өфөлә 6-13 сентябрҙә үтә. Сараны асыу тантанаһы 6 сентябрҙә 16 сәғәттә Конгресс-Холл алдындағы майҙанда башлана. Фестивалдә төрки телле илдәрҙән һәм республикаларҙан 17 театр ҡатнашасаҡ. Беҙҙең республика исеменән М.Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театры сығыш яһаясаҡ һәм Мостай Кәрим пьесаһы буйынса Айрат Абушахманов ҡуйған "Ай тотолған төндә" трагедияһын тәҡдим итәсәк. Фестиваль 6 сентябрҙә 18 сәғәттә Конгресс-Холл сәхнәһендә Башҡорт дәүләт академия драма театрының "Әхмәтзәки Вәлиди Туған" тарихи драмаһы менән асыласаҡ.

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов һәм БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай рәйесе Константин Толкачев Бәләбәй районының "Аҡсарлаҡ" балалар сәләмәтләндереү үҙәгендә үткән "Мин - граждан" йәштәр форумында ҡатнашыусылар менән осрашты. "Мин - граждан" йәйге йәштәр форумы республикала "Берҙәм Рәсәйҙең Йәш Гвардияһы"ның Башҡортостан төбәк бүлексәһе башланғысы менән өсөнсө тапҡыр үткәрелә. Быйыл йәштәр форумының статусы күтәрелде, ул Волга буйы федераль округы кимәлендә үткәрелә.

*ӨФӨ ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ*

**Өфө - донъяуи кимәлдәге саралар уҙғарыусы ҙур аренаға әйләнә бара. Ағымдағы йылдың сентябрендә баш ҡала үҙендә Йәйге биатлон буйынса бөтә донъя чемпионатын, декабрь-ғинуарҙа - Йәш командалар араһында хоккей буйынса бөтә донъя чемпионатын, февраль-мартта иһә VI Халыҡ-ара ҡышҡы балалар уйындары ҡатнашыусыларын һәм ойоштороусыларын ҡабул итәсәк. Ә 2015 йылдың йәйендә Өфөлә ҙур әһәмиәткә эйә ике сара - ШОС (Шанхай хеҙмәттәшлек ойошмаһы) һәм БРИКС саммиттары уҙасаҡ.**

# ҮҘЕБЕҘҘЕ ТАНЫТАБЫҘ ҺӘМ...

## файҙалы бәйләнештәр йәлеп итәбеҙ

Шанхай хеҙмәттәшлек ойошмаһына нигеҙ 1996-1997 йылда Ҡытай, Рәсәй, Ҡаҙағстан, Тажикистан һәм Ҡырғыҙстан тарафынан һалына. Ул ваҡытта биш ил етәкселеге хәрби өлкәлә үҙ-ара ышанысты нығытыу һәм сиктәр эргәһендәге хәрби көстәрҙе әҙәйтеү хаҡында килешеүҙәргә ҡул ҡуя. Ә 2001 йылда иһә ойошма исемлегенә Үзбәкстан да индерелә. Бөгөнгө көндә ойошма ағзалары исемлегенә алты төп илдән тыш, Афғанстан, Һиндостан, Иран, Монголия, Пакистан (күҙәтеүсе илдәр), Белоруссия, Төркиә һәм Шри-Ланка (диалог буйынса партнерҙар) инә. Шулай уҡ ойошма ООН, АСЕАН, ЕврАзЭС ойошмалары, Төркмәнстан һәм АҠШ илдәре менән партнерлыҡ хаҡында килешеүҙәр төҙөгән. Шанхай хеҙмәттәшлек ойошмаһының төп мәсьәләләре булып тотороҡлолоҡто һәм хәүефһеҙлекте нығытыу, терроризм, экстремизм, сепаратизмға ҡаршы көрәш һәм наркотиктар әйләнешен контролдә тотоу, иҡтисади һәм энергетик партнерлыҡты, мәҙәни һәм фәнни бәйләнеште үҫтереү тора. Ойошмаға ингән илдәр етәкселеге йылына бер тапҡыр төрлө ҡалаларҙа осрашып, мөһим һәм әһәмиәтле сәйәси, иҡтисади, фәнни һәм мәҙәни өлкәгә ҡағылған документтарға ҡул ҡуя. Рәсәй ҡалалары араһынан бындай хоҡуҡҡа быға тиклем бары Мәскәү, Санкт-Петербург һәм Екатеринбург ҡына эйә булды.

2006 йылда Рәсәй Президенты Владимир Путиндың БРИК ойошмаһы төҙөү хаҡында тәҡдим менән сығыш яһауы яңы быуаттағы иң әһәмиәтле геополитик ваҡиғаларҙың береһе булды. 2011 йылда Бразилия, Рәсәй, Һиндостан һәм Ҡытай (ойошманың исеме илдәрҙең баш хәрефтәре аббревиатураһынан алына) ингән ойошма составына шулай уҡ Көньяҡ Африка Республикаһы ла ҡушыла



(ойошма исеме БРИКС (South Africa) итеп үҙгәртелә). БРИКС ағзалары ныҡлап үҫешә барыусы биш ил булараҡ характерлана. Эксперттар фекеренсә, 2050 йылға БРИКС-ҡа ингән илдәрҙең дөйөм иҡтисады донъяның иң бай илдәренең иҡтисадынан күпкә артыҡ буласаҡ. Ысынлап та, БРИКС ағзалары үҙҙәрендә бар донъя иҡтисады өсөн мөһим булған бай тәбиғи ресурстарға эйә. Мәҫәлән, Бразилия ауыл хужалығы продукцияһына бай, Рәсәй минераль ресурстарҙы иң күп экспортлаусы илдәр исемлегенә инә, Һиндостан арзан интеллектуаль ресурсҡа, Ҡытай арзан эшсе ҡулдарға, ә Көньяҡ Африка Республикаһы бихисап тәбиғи ресурстарға эйә. Был ресурстарҙың барыһы ла донъя иҡтисады таянып торған төп таяуҙар. Ҡайһы бер күҙәтеүҙәр буйынса, БРИКС-тың иҡтисади яҡтан көслө булыуы артабан уға сәйәси аренала ла тәүге урынды биләүгә килтерәсәк. Шулай уҡ БРИКС составына ингән илдәр, төрлө тикшереүҙәр буйынса, төрлө инвестициялар урынлаштырыу йәһәтенән дә иң ҡулайлы, тип һаналған илдәр рәтендә. БРИКС ойошмаһы саммиттары 2009 йылдан алып уҙғарыла. Беренсе саммит Рәсәйҙең Екатеринбург ҡалаһында, ә ҡалғандары сит илдәрҙә үтә.

Шанхай хеҙмәттәшлек ойошмаһы һәм БРИКС саммиттарында төрлө илдәр башлыҡтары һәм башҡа бик күп власть вәкилдәре, сәйәсмәндәр, эшҡыуарҙар һәм башҡа өлкәлә эшләүселәр ҡатнаша. Был, үҙ сиратында, 2015 йылғы саммиттар ваҡытында Башҡортостандың баш ҡалаһы бөтә донъя иғтибары аҫтында буласағы хаҡында һөйләй. Саралар юғары кимәлдә уҙһын өсөн Башҡортостан бөгөн үк етди әҙерлек эштәре алып бара. Республика Президенты указына ярашлы, ағымдағы йылдың октябренә тиклем үк әҙерлек саралары планы раҫланырға тейеш. Шулай уҡ саммиттарҙы уҙғарыуға әҙерлек алып барыу маҡсатында Республика ойошма комитеты ла төҙөлдө.

Саммиттарҙың Өфөлә уҙыуы баш ҡала өсөн оло әһәмиәткә эйә, сөнки уларға әҙерлек барышында баш ҡалаға күпләп инвестицион проекттар йәлеп ителәсәк һәм ҡала өсөн мөһим объекттар төҙөләсәк. Улар иҫәбенә донъя стандарттарына яраҡлаштырылған ҡунаҡханалар төҙөү, юлдарҙы тәртипкә килтереү, "Өфө" аэропортын модернизациялау һәм башҡа төрлө эштәр инә. Саммиттарға әҙерләнеү барышында ҡала округы хакимиәте быға раҫланған ҡайһы бер проекттарҙың финанслау мәсьәләһен яңынан ҡараясаҡ. Ләкин был төҙәтеүҙәр социаль объекттар, поликлиника, мәктәп һәм балалар баҡсаларын төҙөүгә ҡағылмаҫҡа тейеш, тип белдерҙе ҡала хакимиәте башлығы Ирек Ялалов.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Өфө донъя кимәлендәге ҙур сараларҙы уҙғарыуға тулыһынса әҙер икәнлеген күптән белдереп килде. Ниһайәт, был ниәттәр тормошҡа аша башланы һәм Өфө береһенән-береһе әһәмиәтлерәк сараларҙы ҡаршыларға әҙерләнә. Тимәк, баш ҡаланы һәм тотош республиканы абруйлы итеп күрһәтеү өсөн бик күп эштәр аткараһы бар.**

**Гөлназ САФУАНОВА әҙерләне.**

*БАШ ЙОРТТА*

# ӨФӨ ЙҮКӘЛӘРЕ...

## күңелде шатландыра



**Өфөнөң Ленин урамы буйлап йәйәүләп бер үтеүең була - бар арыуҙарың, проблемаларың онотола. Яратҡан баш ҡалабыҙҙың бына ошо рәүешле йөрәкте "дауалай" торған һәләте лә бар.**

Ял итәм, тиһәң, матур парктары, музейҙары, театрҙары булған өсөн дә яратам Өфөнө. Студент саҡтан ғәҙәт иткәнгәме икән, Салауат Юлаев һәйкәле янындағы майҙанға барып, Ағиҙелдең бейек ярынан тирә-йүнгә күҙ һалып, тағы ла бер тапҡыр иҫ киткес хозурлыҡҡа һоҡланып ҡайтҡы килеп тик тора. Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге Милли китапхана эргәһендәге йүкә аллеяһы йылдың һәр миҙгелендә лә, тәүлектең һәр ваҡытында ла гел ыңғай тойғолар уятып, күңелде шатлыҡҡа тултыра. Бар ерҙәге тәртип, таҙалыҡ өфөләләрҙе генә түгел, килгән ҡунаҡтарҙы ла һоҡландыра. Ҡала етәкселегенең ҡала урамдарын йәшелләндереүгә ҙур иғтибар биреүе Өфөнө тағы ла гүзәлерәк итә.

Һуңғы осорҙа урамдарҙа машиналарҙың артыуы ғына был матурлыҡҡа тап төшөргәндәй. Урамдарҙы киңәйтеп, машиналыларға уңайлыҡтар тыуҙырҙылар ҙа, йәйәүлеләрҙең ғүмерен хәүеф аҫтына ҡуйҙылар һымаҡ тойолоп китә. Ҡайһы бер урындарҙа мәктәп тупһаһын аша атлап сығыу менән машина йөрөй торған юлға төртөләһең. Автобус водителдәренең артыҡ 15 һум өсөн йәнен сығарып бирерҙәй булыуына аптырайым. Хәүефһеҙлек һәм юл хәрәкәте ҡағиҙәләрен белмәгән кеше кеүек ҡыланалар. Бына был проблемаларҙы берәй ҡаза килеп сығып, кеше ғүмерҙәре ҡыйылмаҫ элек хәл итергә кәрәк.

**Ләйсән ХӘСӘНОВА.**
**Өфө ҡалаһы 10-сы дөйөм белем биреү мәктәбенең директор урынбаҫары.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостанда үткән тәүлек эсендә ике урман янғыны һүндерелгән. Баймаҡ һәм Стәрлетамаҡ райондарында сыҡҡан янғындарҙан 4,5 гектар урман зыян күргән. Йыл башынан урман фонды биләмәһендә 215 урман янғыны теркәлгән. Уларҙан 1555 гектар урман зыян күргән. Хәтерегеҙгә төшөрәйек, БР Урман хужалығы министрлығының диспетчер идараһы пункты тәүлек әйләнәһенә эшләй. Урман һағының телефоны: 8(347)262-40-39 йәки 8-800-100-94-00.

✓Өфөлә "Динамо" стадионында Чечен Республикаһында хеҙмәт бурысын үтәгәндә һәләк булған полиция хеҙмәткәрҙәре менән хушлашыу үтте. БР буйынса Эске эштәр министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, 1995 йылдан алып Чечен Республикаһында хеҙмәт командировкаларында Башҡортостан буйынса Эске эштәр министрлығының 5 меңдән ашыу хеҙмәткәре булған, был ваҡыт эсендә 20 кеше һәләк булған. Һәр полиция хеҙмәткәре тыуған районында ерләнде. Юрий Алексеевты - Ҡалтасы районының Ҡалмыябаш ауылында, Илшат Ильясовты - Ғафури районының Үзбәк ауылында, Ринат Мостафинды - шул уҡ райондың Родина ауылында, Риф Абдуллинды Әлшәй районының Ярташлы ауылында һуңғы юлға оҙаттылар.

✓Башҡортостанда волейбол киң таралған спорт төрө булырға тейеш, тип иҫәпләй республика Президенты Рөстәм Хәмитов. Был хаҡта ул Өфөнөң "Урал" һәм "Уфимочка" волейбол клубтары уйынсылары һәм тренерҙары менән осрашыуҙа әйтте. "Уфимочка" командаһының баш тренеры Андрей Подкопаев тренировкалар үткәреү базалары, шул иҫәптән волейбол өсөн өс мең кешегә иҫәпләнгән Спорт һарайы кәрәклеге хаҡында әйтте. "Махсус һарай төҙөү өсөн 500 миллион һумдан ашыу аҡса кәрәк буласаҡ, федераль үҙәктең ярҙамынан тыш, мәсьәләне хәл итеп булмаясаҡ. Әммә волейбол беҙҙә киң таралған һәм популяр спорт төрө булырға тейеш", - тигән фекерен белдерҙе республика башлығы.

✓Башҡортостандың Ауыл хужалығы министрлығы төбәктең агросәнәғәт комплексы ойошмаларынан дәүләт ярҙамы алыуға конкурста ҡатнашыу өсөн документтар ҡабул итә башланы. Ғаризалар һәм барлыҡ тейешле документтар 22 августан 22 сентябргә тиклем республиканың Ауыл хужалығы министрлығында ҡабул ителә. Конкурс тураһында тулыраҡ мәғлүмәт Министрлыҡтың рәсми сайтында урынлаштырылған. Өҫтәмә мәғлүмәт алыу өсөн телефон: 8(347) 273-24-23.

**"Башинформ"дан.**

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# БАШ ҠАЛАҒА...

## инженерҙар кәрәк

**Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов Өфөнөң Мәскәү ҡалаһындағы юғары уҡыу йорттарына уҡырға ингән йәштәре менән осрашты. Ҡала округы хакимиәте һәм ситтә белем алаСаҡ студенттар араһындағы осрашыу тәүге тапҡыр үткәрелә. Йәштәр үҙҙәрен ҡыҙыҡһындырған һорауҙарға яуаптар алды, туған ҡалаһының яҡын киләсәгенә ҡағылышлы пландар менән танышты. Мәскәүгә уҡырға инһәләр ҙә, барыбер тыуған тарафтарына ҡайтып эшләргә иҫәп тотоуҙарын белдереүселәр ҙә булды.**



Ирек Ишмөхәмәт улы билдәләүенсә, һуңғы йылдарҙа йәш быуындың күпләп башҡа ҡалаларға, өлкәләргә ағылыуы күҙәтелә. Ҡала үҫеше өсөн был, әлбиттә, кире күренеш булып тора.

- Өфө йәштәренең илдәге иң яҡшы уҡыу йорттарына уҡырға инеүе хуплауға лайыҡ. Әммә беҙ һәр ваҡыт уларҙың тыуған яҡтарына ҡайтыуын көтөп ҡалабыҙ. Өфө ҡалаһына бөгөн аҡыллы, һәләтле йәш белгестәр кәрәк, - тине ҡала башлығы.

Яҡын киләсәктә, ысынлап та, Өфөгә заманса белемгә эйә булған йәштәр талап ителәсәк. Алдағы йылдарҙа ҡалала юғары технологиялы предприятиелар асыу күҙаллана. Улар илдәге эре компанияларҙың филиалдары булыуы ихтимал. Ирек Ялалов әйтеүенсә, Өфөнө авиация моторҙарының баш ҡалаһына әйләндереү бурысы ла көн үҙәгендә. Моторҙар төҙөү заводын киңәйтеп, башҡа ҡалаларҙа уға буйһонған предприятиелар асыу күҙаллана. Нефть эшкәртеү заводын да үҙгәртеп ҡороу талап ителә. Бөгөн нефть ситкә сеймал рәүешендә генә һатыла. Нигеҙҙә завод яғыулыҡ эшкәртеүҙән ары китмәй. Һөҙөмтәлә килеме лә аҙ сыға. Предприятие алдында тәрән эшкәртеү технологияларын үҙләштереп, яңы продукцияны һатыуға сығарыу бурысы тора.

- Ҡала үҫешен өсөн капиталь төҙөлөштә әүҙем алып барыу мотлаҡ, - ти ҡала башлығы. Билдәләнеүенсә, быйыл баш ҡалала 740 мең квадрат метр торлаҡ майҙаны төҙөлгән. Киләсәктә йыл һайын миллион квадрат метр торлаҡ төҙөү күҙаллана.

Бөгөн баш ҡалабыҙға нindәй һөнәр эйәләре талап ителә һуң? Өфө айырыуса инженер кадрҙарына ҡытлыҡ кисерә. Сәнәғәттә, төҙөлөштә эшләрлек белгестәр етешмәй. Йәш юристарға, иҡтисадсыларға иһә эш табыуы ҡыйынға тура киләсәк.

- Өфө магазиндарында һатыусы булып күбеһенсә юғары белемле йәштәр эшләй. Улар араһында Өфө авиация техник университетын тамамлағандар ҙа бар. Заводҡа эшкә урынлашмауҙарын улар унда талаптар ҡаты булыуы менән аңлата. Йәгни йәштәр бөгөн яуаплы эштән баш тарта. Шулай уҡ ҡаланың торлаҡ-коммуналь хужалыҡтарына эшсе кадрҙар етешмәй. Өфө йәштәре унда бармағанлыҡтан, эш урындары ауылдан килгән егеттәр иҫәбенә тулыланып тора, - тине Ирек Ялалов.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Осрашыуҙа экологик мәсьәлә лә күтәрелде. Предприятиеларҙы мәжбүри рәүештә экологик яҡтан хәүефһеҙ булған эшкәртеү технологияларына күсереүҙе ғәмәлгә ашыра башлаясаҡбыҙ, тине Ирек Ялалов. Хәҙер ҡалала махсус лабораториялар ярҙамында зарарлы ташламалар сығанағын асыҡлау мөмкинлеге буласаҡ. Был үҙ сиратында ғәйепленләрҙе яуаплылыҡҡа тарттырырға булышлыҡ итәсәк. Шулай ҙа экологик зыяндың күпселек өлөшөнә сәнәғәт предприятиелары түгел, ә ҡала автотранспорты сәбәпсе булып тора. Бөгөн Өфөлә мең кешегә 320 автомобиль тура килә. Киләһе йылдарҙа был һан ике тапҡырға артасаҡ, тип фаразлана.**

Мәһәҙи МОРАТОВ.

ШУНДАЙ ХӘЛДӘР!

# СИТТӘР - БЕҘҘЕКЕН...

## беҙҙекеләр - Мәскәүҙәге уҡыу йортон

**Республиканың юғары уҡыу йорттарында ҡабул итеү кампанияһы тамамланды. Республиканың Мәғариф министрлығында белдереүҙәренсә, быйыл республиканың 12 юғары уҡыу йортона бөтәһе 10910 бюджет урыны бүленгән. Көндөҙгө уҡыу бүлегенә тура килгән 8903 урынға иһә абитуриенттар тарафынан 74 меңдән ашыу ғариза тапшырылған. Шулай итеп, республика буйынса көндөҙгө бүлектең бюджет урындарына конкурс уртаса 8,4 кеше тәшкил иткән.**

Тапшырылған ғаризалар буйынса лидерҙар исемлеген Башҡорт дәүләт университеты аса. БДУ-ға быйыл, барлыҡ филиалдар менән иҫәпләгәндә, бюджет урындарға 19790, ә коммерция нигеҙендә 9345 ғариза тапшырылған. Шул иҫәптән Өфөләге уҡыу йорто 12793 (бюджет) һәм 7197 (коммерция нигеҙендә) ғариза ҡабул иткән. Популярлыҡ буйынса икенсе баҫҡысты Өфө дәүләт авиация техник университеты биләй. Ундағы 1698 бюджет урынға 13540 ғариза тапшырылған. Лидерҙар исемлегенең өсөнсө урынында 1115 бюджет урынға ҡабул ителгән 13058 ғариза менән Башҡорт дәүләт аграр университеты тора. Шулай уҡ Өфө дәүләт нефть техник университеты (тапшырылған ғаризалар һаны - 11071), М.Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты (8992) ла абитуриенттар араһында ихтыяжлыҡ менән файҙаланған.

Абитуриенттар араһында айырыуса популяр һөнәрҙәр исемлегенә "Иҡтисад һәм идара итеү" (бер урынға 50-100 кеше), "Геодезия һәм ер төҙөлөшө" (24 кеше), "Автоматика һәм идара итеү" (23 кеше), "Мәғлүмәти хәүефһеҙлек" (20 кеше), "Электрон техника, радиотехника һәм бәйләнеш" (11 кеше) йүнәлештәре буйынса һөнәрҙәрҙе индерергә була. Шулай уҡ "Юрист", "Менеджмент" һәм "Иҡтисадсы" һөнәрҙәре лә әле булһа үҙ актуаллеген юғалтмай. Мәҫәлән, Өфө дәүләт авиация техник университетының уҡытыу эштәре буйынса проректоры Николай Криони белдереүенсә, "Иҡтисади хәүефһеҙлек" һөнәренә конкурс бер урынға 100-ҙән ашыу кеше тәшкил иткән. Ә иң аҙ конкурс "Гуманитар фәндәр" йүнәлеше төркөмөндә ("Филология" йүнәлеше) булған. Унда бер урынға 4-тән алып 1,2 кеше дәғүә иткән.

Ағымдағы йылда Берҙәм дәүләт имтихандарын уҙғарыу көслө контроль аҫтында башҡарылды. Шуға күрә 2012 йылғы ҡабул итеү кампанияһы барышында БДИ һөҙөмтәләренең күпкә түбән булыуына әллә ни аптырарлыҡ түгел, ти белгестәр. Был хәл, әлбиттә, үтеү балының да (проходной бал) түбәнерәк булыуына килтергән. Мәҫәлән, 80-100 балл йыйыусылар һаны алдағы йылдар менән сағыштырғанда күпкә әҙерәк.

Берҙәм дәүләт имтиханына бәйле тағы бер үҙенсәлек. Тикшереүҙәр күрһәтеүенсә, БДИ индерелеүе баш ҡаланың юғары уҡыу йорттарында белем алырға теләүселәр араһында йылдан-йыл өфөләләрҙең әҙәйеүенә килтерә. Уларҙың күбеһе хәҙер Мәскәү һәм Санкт-Петербургта белем алыуҙы хуп күрә. Ә шул уҡ ваҡытта юғары белемдә Өфөлә алырға теләүселәр араһында сит төбәк абитуриенттары артҡандан-арта бара. Уларҙың күпселеге, уҡып бөткәс, республикала ҡала һәм эш баҙарында ҙур конкуренция тыуҙыра, ти белгестәр.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Күренеүенсә, һөнәр һайлауға килгәндә әллә ни үҙгәрештәр юҡ. Биш йылдан эш баҙарына тағы ла бихисап хоҡуҡ белгесе һәм иҡтисадсыларҙан торған оло тулҡын ябырыласаҡ. Уларҙың нисә проценты үҙенә лайыҡлы эш урыны табыр, әлегә билдәһеҙ. Ә әлегә кисәге абитуриенттар үҙҙәренең яңы статусына өйрәнә һәм уҡыу йылына әҙерләнә. Ләкин юғары уҡыу йорто студенты булыуға лайыҡлы икәнлеген иҫбат итеү һәм тулы хоҡуҡлы студент булып китеү өсөн уларҙың үтәһе һынауҙары алда әле.**

Наҙгөл САФИУЛЛИНА.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓29 августан 9 сентябргә тиклем Бөйөк Британияның баш ҡалаһында үтәсәк XIV йәйге Паралимпия уйындарында Рәсәйҙең йыйылма командаһы составында Башҡортостандан 16 спортсы сығыш яһаясаҡ. Улар еңел атлетика, йөҙөү һәм фехтование буйынса көс һынашасаҡ. Улар иҫәбендә М.Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты студенттары - физик культура факультетының бишенсе курс студенты Оксана Савченко һәм ошо уҡ факультет аспиранты Александр Неволин-Светов бар.

✓"Башҡортостан" телерадиокомпанияһы дәүләт унитар предприятиеһы нигеҙендә Башҡортостан радиоһы һәм телевидениеһы музейы булдырыласаҡ. Музейҙы ойоштороусылар элекке радиоалғыстар, телевизорҙар, уларҙың деталдәрен, радиотапшырыуҙар әҙерләгәндә файҙаланылған техник сараларҙы ҡабул итә. Иҫке техниканы яңы аппаратураға алмаштырырға мөмкин. Тулыраҡ мәғлүмәт алыу өсөн телефондар: музей булдырыу буйынса эш төркөмө - 8(347)292-59-89, телевидение студияһының ҡабул итеү бүлмәһе - 8(347)272-93-71, радиотапшырыуҙар студияһының ҡабул итеү бүлмәһе - 8(347)272-38-20.

✓1 сентябрҙән Башҡортостандың ауыл мәктәптәрендә белем алыусы балалар умартасылыҡ нигеҙҙәренә өйрәнә башлаясаҡ. Был дәрес мәктәп программаһына Урал арьяғын иҡтисади йәһәттән үҫтереү урта сроклы комплексы программаһын тормошҡа ашырыу сиктәрендә 2011-2015 йылдарға Урал арьяғында умартасылыҡты үҫтереү планына ярашлы индерелә. Әлеге ваҡытта уҡытыусылар Башҡорт дәүләт аграр университетында квалификация күтәреү курстарын үтә. Умартасылыҡ буйынса дәрестәр төбәктең 39 пилот мәктәбендә индереләсәк.

✓25-26 августа "Аҡбуҙат" ипподромы алдындағы асыҡ майҙанда йола буйынса "Баллы Башҡортостан" исемле умартасылыҡ продукттары йәрминкәһе үтә. 1 сентябрь, Белем көнөндә, Серго Орджоникидзе исемендәге майҙанда һәм "Пушкинский" сауҙа-сервис комплексы алдында йәнә ике бал йәрминкәһе үтә. Йәшелсә йәрминкәләре Өфөлә 15 сентябрҙә башланып, һыуыҡтар төшкәнсе дауам итәсәк. Ноябрҙә һауа шарттары айҡанлы сауҙа итеү туҡтатылыр, моғайын. Йылдың һуңғы айында ауыл хужалығы етештереүселәре баш ҡалаға һатыу өсөн ит алып киләсәк.

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# МУНДИР НАМЫҪЫ ҠИММӘТ,

## йәки Өфөлә үтәсәк чемпионаттар тураһында

**Башҡортостандың баш ҡалаһы Өфөлә үткәреләсәк Йәйге биатлон буйынса донъя чемпионаты башланыуға теүәл бер ай ваҡыт ҡалды. 18-23 сентябрҙә уҙасаҡ сараға әҙерлек сиктәрендә "Биатлон" комплексының атыу майҙаны киңәйтелгән, спорт объекттарында күп кенә башҡа эштәр башҡарылған. Әлеге көндә VI Халыҡ-ара ҡышҡы балалар уйындары үтәсәк "Олимпик-парк" комплексында балалар-үсмерҙәр спорт мәктәбе бинаһы төҙөлөп ята. Йәштәр командалары араһында шайбалы хоккей чемпионатына әҙерләнгән "Өфө-Арена" һәм "Боҙ һарайы" комплекстарын төҙөкләндереү, ремонт эштәре тамамланмаған әле.**

Өфө ҡалаһы округы хакимиәте башлығы эргәһендәге оператив кәңәшмәлә был хаҡта Өфө ҡала округының физик культура һәм спорт комитеты рәйесе Сергей Степановтың мәғлүмәте тыңланды. Өфөлә 2012-2013 йылдарҙа үтәсәк донъя чемпионатарына әҙерлек барышы тураһындағы сығыш тамамланғас, Ирек Ялалов сараларҙы әҙерләүҙә, атап әйткәндә, билеттар һатыу һәм спонсорҙар йәлеп итеүҙә һүлпәнлек күҙәтелеүе тураһында тәнҡит һүҙҙәре әйтте: "Бөтә донъяла бындай кимәлдәге ярыштар иктисади яҡтан уңышлы булыуы менән айырыла, - тине ҡала хакимиәте башлығы, - ә ни өсөн беҙҙең ҡалала атап үтелгән чемпионаттарға билеттар ни бары 6 кассала ғына һатыла? Ни өсөн башҡа ҡалаларҙың да кассалары һәм интернет мөмкинлектәре ҡулланылмай?"

Билдәле, бындай мәртәбәле һәм ҙур сараларҙы әҙерләүе еңел түгел. Ә шулай ҙа етешһеҙлектәрҙе ваҡытында күреп, төҙәтеп барыу кәрәк. Был йәһәттән Өфө башлығының яуаплылығы, әүҙемлеге, бар әҙерлек эштәрен дә контролдә тотоуы, һәр мәсьәләлә хәбәрҙар булыуы маҡтауға лайыҡ. Был осраҡта "Мундир намыҫы ҡиммәт" тиҙәр. Тәүге тапҡыр халыҡ-ара кимәлдәге спорт сараларыүткәрергә йөрьәт иткәнбеҙ икән, уға "юғары кимәл" мөһөрө баҫырға кәрәк бит.

Әйткәндәй, Өфөлә үтәсәк чемпионаттарға әҙерлек буйынса ойоштороу комитетының күптән түгелге бер кәңәшмәһендә Рәсәй төбәктәренән ошо сараларҙы үткәреүгә яуаплы кешеләр ҙә ҡатнашҡайны. Хәбәрсебеҙ уларҙың бер-нисәһенә Башҡортостан, Өфө тураһындағы фекерҙәре менән уртаҡлашыуҙарын һорап мөрәжәғәт итте.

**Сергей Задорожко, ОСАО "Ингосстрах" инженер үҙәге директоры, Мәскәү ҡалаһы:** Өфө матур, таҙа ҡала булыуы менән оҡшаны. Юлдар төҙөү бик әүҙем алып барылғанлығы күҙгә ташлана. Республика етәкселегенең халыҡ тураһында ҡайғыртыуы тойомлана. Башҡа ҡалалар менән сағыштырғанда, Өфөнөң тышҡы йөҙөндә байтаҡ үҙенсәлектәр күҙгә бәрелә. Өфөлә күңелле генә бер йәнлелек, күтәренкелек бар. Ундайҙы мин, мәҫәлән, Мәскәүҙә тоймайым. Кешеләрҙең йөҙө яҡты, барыһы ла йылмая, йәмерәйеп йөрөгән бер кешене лә күрмәнем.

**Михаил Денисов, "Ариада" ЯАЙ директорының тышҡы бәйләнештәр буйынса ярҙамсыһы, Марий Эл Республикаһы:** Өфөнөң таҙалығы оҡшаны. Шулай уҡ тәртип тә яҡшы һымаҡ. Мин, мәҫәлән, урамдар буйлап үткән саҡта һыра тотоп йөрөгән йәштәрҙе күрмәнем. Тимәк, бында йәштәр аҡыллыраҡ. Юғиһә, башҡа ҡалаларға барһаң, был күренештең тап киреһе күҙгә ташлана. Өфөгә килгәс тә кискеһен иң беренсе сиратта Салауат Юлаев һәйкәлен барып күрҙем. Өфө кешеләрененң кемеһе менән генә һөйләшһәм дә, барыһы ла ошо һәйкәлде барып күрергә тәҡдим итте. Ғөмүмән, "Башҡортостан" тиһәләр, иң тәүҙә Салауат Юлаев һәм башҡорт һылыуҡайы образы күҙ алдына килә. Тәүге ассоциация хоккей клубына бәйле, сөнки үҙем хоккей ҡарарға, юлаевсылар өсөн дә яның-көйөргә яратам. Беҙҙә лә Башҡортостандан егеттәр эшләй, уларҙың да хоккей яратыуын беләм. Хоккей клубына исем бирелгән Салауат Юлаев шәхесе тураһында ла, башҡорттар тураһында ла әллә ни күпте белмәүем өсөн ояҫ, әлбиттә, әммә үҙебеҙгә ҡайтҡас, интернеттан уҡыясаҡмын, тигән маҡсат менән ҡайтып китәм.

**Алексей Гербов, Ненец автономиялы округының Нарьян-Мар ҡалаһындағы Боҙ һарайы директоры:** Беҙҙә лә, һеҙҙә лә Урал тауҙары берләштерә. Ненец автономиялы округы ла, Башҡортостан да Урал тауҙары итәгендә урынлашҡан. Өфө ҡалаһы ла тауҙар өҫтөндә ултырғанлыҡтан, әллә ҡайҙан матур булып күренеп ултыра. Ҙур ҡала булыуы менән ҡыҙыҡлы. Беҙҙә бары тик бер генә ҡала бар - Нарьян-Мар. Башҡортостанда мин тәүге мәртәбә, шулай булыуға ҡарамаҫтан, уны оҡшатып өлгөрҙөм. Үҙем Боҙ һарайы етәксеһе булараҡ, белгестәр араһында киң билдәле булған "Өфө-Арена"ны күрергә ашҡынып килдем. Иғтибарлап ҡараһаң, Өфөнөң күп урынында төҙөлөш эштәре алып барылғанын күрергә була. Спорт объекттары ғына түгел, ә торлаҡ йорттар ҙа күпләп төҙөлә икән, тимәк, яҡшы йәшәйһегеҙҙер, тигән уй килә.

**Владимир Редреев, Урал дәүләт университетының физик культура кафедраһы мөдире:** Ҡала үҙгәрә, яңы йорттар барлыҡҡа килә, юлдар яҡшыра, ә кешеләр үҙгәрмәгән - һаман шулай ҡунаҡсыл, яҡты йөҙлө. Башҡортостан кешеләре - ул минең үҙ кешеләрем, сөнки мин үҙем дә Башҡортостанда Балаҡатай районында тыуғанмын. Бала сағымдан ҡурай моңон яратам. Иртән тороп, ҡурай тауышын ишетеп үҫкәнгәнме, күңелемә нык яҡын был моң. Башҡортса бер аҙ аңлайым. 1975 йылдан алып Силәбелә йәшәйем, шунда эшләйем, Силәбене лә, Башҡортостанды ла үҙ ватаным тип һанайым. Башҡортостан тәбиғәте һоҡландыра, уның балы, ҡымыҙы тураһында әйтеп торорға ла түгел. Башҡорт халҡының батыр улдары - Салауат Юлаев һәм уның көрәштәштәренен, Пугачев менән бергә батша режимына, ер биләүселәргә ҡаршы баш күтәреүе тураһында яҡшы хәбәрҙармын. Салауатты Башҡортостанда ғына түгел, беҙҙең Силәбе өлкәһендә лә бик ҡәҙерләйҙәр - уның исемендәге ярыштар уҙғаралар, уға һәйкәлдәр асалар, төрлө мәҙәни кисәләрҙә лә батыр исеме телдән төшмәй.

**Илгиз ИШБУЛАТОВ яҙып алды.**

ҺОРАУ - ЯУАП

### ПЕНСИОНЕРҘАР ЭШТӘН КИТМӘЙ

**"Ойошманың коллектив килешеүендә йәш белгестәргә урын биреү йәһәтенән пенсия йәшенә еткәндәрҙе эшенән ебәреү тураһында күрһәтелгән пункт законға ярашлымы?"**

- РФ Хеҙмәт кодексында "пенсия йәшенә етеү" эштән сығарыуға нигеҙ булып тормай. Улай ғына ла түгел, РФ Хеҙмәт кодексы эшләп йөрөүсе пенсия йәшенә еткән граждандарҙың хоҡуҡтарын ҡыҫырыҡлауға юл ҡуйырға ярамағанлығы тураһында (мәҫәлән, 3, 64-се статьялар) бер нисә тапҡыр иҫкәртеп үтә. Хеҙмәт килешеүе буйынса эш башлау өсөн минималь йәш күрһәтелгән хәлдә лә РФ Хеҙмәт кодексы тарафынан иң оло йәш сиге билдәләнмәй. Шул уҡ ваҡытта Хеҙмәт кодексының 59-сы статьяһы пенсия йәшендәге кешеләрҙе эшкә алыуҙы гарантиялай - улар менән яҡтарҙың килешеүе буйынса ваҡытлыса хеҙмәт договоры төҙөлә. Коллектив килешеүҙә эшсәндәрҙең хәлен насарайтыуға килтереүсе шарттар булырға тейеш түгел, ундай положениелар ғәмәлгә яраҡһыҙ тип иҫәпләнә һәм уларҙы эштә файҙаланыу тыйыла (50-се статья). Шуға бәйле пенсия йәшенә еткән хеҙмәткәрҙәрҙе эштән сығарыуҙы күҙҙә тотҡан положение ойошманың коллектив килешеүендә булырға тейеш түгел.

### ЭШ БИРЕҮСЕ ТҮЛӘЙ

**"Эш биреүсе ( федераль ҡаҙна учреждениеһы) медицина хеҙмәткәрҙәренә квалификация күтәреү училищеһында уҡыған өсөн түләүҙән баш тарта, йәнәһе, был учреждениенең 2012 йылғы сығымдар сметаһында ҡаралмаған. Ул хаҡлымы?"**

- РФ Хеҙмәт кодексының 196- сы статьяһы буйынса, федераль закондар һәм Рәсәй Федерацияһының башҡа норматив хоҡуҡи акттарында ҡаралғанса, әгәр ҙә был хеҙмәткәрҙәр тарафынан билдәле бер эшмәкәрлек төрҙәрен башҡарыу шарты булып тора икән, эш биреүсе квалификация күтәреү эшен ойоштороорға бурыслы. Биш йылға бер тапҡыр медицина хеҙмәткәрҙәренең квалификацияһын күтәреү тураһындағы был шарт РФ Хөкүмәтенең 2007 йылғы 30-сы һанлы ҡарары һәм РФ Һаулыҡ һаҡлау министрлығының "Урта медицина һәм фармацевтика буйынса белемле белгестәрҙең квалификацияһын күтәреү тураһында"1998 йылғы бойороғо менән расланған Медицина эшмәкәрлеген лицензиялау тураһындағы положениела күрһәтелгән. Әле әйтеп кителгән категория медицина хеҙмәткәрҙәренең квалификацияһын күтәреү мотлаҡ булып тора һәм РФ Хеҙмәт кодексының 196-сы статьяһы нигеҙендә эш биреүсе уларға эштәрен уҡыу менән берләштереп алып барыу өсөн тейешле шарттар булдырырға, РФ норматив хоҡуҡи акттары һәм хеҙмәт килешеүендә ҡаралған гарантиялар менән тәьмин итергә бурыслы. Хеҙмәткәрҙе эштән айырып махсус курсҡа ебәргәндә уның эш урыны, уртаса эш хаҡы һаҡланырға тейеш. Икенсе төбәк йә ҡалаға ебәрелгән хәлдә хеҙмәткәргә тейешле күләмдә командировка сығымдары түләнә. Шулай итеп, квалификация күтәреү буйынса бөтөн сығымдарҙы ҡаплау эш биреүсе иңенә төшә.

Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы

### АҠ ҮЛЕМ, ТИҘӘР УНЫ



**Шәкәр ашамай тора алмайбыҙ, шул уҡ ваҡытта уның бик үк файҙалы түгел икәнен дә беләбеҙ. Ә ни өсөн зыянлы һуң ул?**

**Һанап сығайыҡ әле:**

**1.** Сөнки ул иммунитет түбәнәйеүгә йоғонто яһай. **2.** Минералдар әйләнеше боҙолоуына килтереүе ихтимал. **3.** Тиҙ ярһып барыусанлыҡҡа, иғтибар түбәнәйеүгә килтерә. **4.** Триглицеридтар кимәлен күтәрә. **5.** Бөйөрҙәргә зыянлы. **6.** Бактериаль инфекцияларға ҡаршы тороусанлыҡты түбәнәйтә. **7.** Юғары тығыҙлыҡтағы липопротеидтар кимәлен түбәнәйтә. **8.** Хром микроэлементы ҡытлығына килтерә. **9.** Һөт биҙҙәре, эсәк, простата биҙе, тура эсәк яман шешен булдырыуға булышлыҡ итә. **10.** Глюкоза һәм инсулин кимәлен күтәрә. **11.** Баҡыр микроэлементы ҡытлығын булдыра. **12.** Магний менән кальций үҙләштерелеүен боҙа. **13.** Күреү һәләтен насарайта. **14.** Эшкәртелгән аҙыҡтың әселеген күтәрә. **15.** Балаларҙа адреналин кимәле күтәрелеүе ихтимал. **16.** Аҙыҡ һеңдереү тракты боҙолған пациенттарҙа файҙалы матдәләр үҙләштерелеүенә кире йоғонто яһай. **17.** Ҡартайыу процестарын тиҙләтә. **18.** Кариес булдыра. **19.** Алкоголизм үсешенә булышлыҡ итә. **20.** Һимереү менән яфаланасаҡһығыҙ. **21.** Сей яралы колит хәүефен арттыра. **22.** Ашҡаҙан һәм бәйән эсәге сей яра ауырыуҙарын киҫкенләштерә. **23.** Артрит үсешенә килтерә. **24.** Бәшмәк ауырыуҙарын булдыра. **25.** Үт ҡыуығында таштар барлыҡҡа килә. **26.** Киҫкен аппендициттың сәбәбе булыуы ихтимал. **27.** Тарҡау склерозға килтерә. **28.** Геморрой шәкәрҙе күп ҡулланыу һөҙөмтәһендә лә барлыҡҡа килә. **29.** Веналарҙың варрикоз киңәйеүенә булышлыҡ итә. **30.** Ауырға ҡалыуҙан һаҡлағыс таблеткалар ҡулланыусыларҙа глюкоза һәм инсулин кимәлен күтәрә. **31.** Пародонтоз кеүек ауырыуҙарҙың нигеҙендә шәкәр ята. **32.** Остеопороз үҫеше хәүефен күтәрә. **33.** Аҡһым үҙләштереүҙе боҙа. **34.** Диабетҡа килтерә. **35.** Йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәренә ҡаршы тороусанлыҡты түбәнәйтә. **36.** ДНК структураһын боҙоуы ихтимал. **37.** Коллаген структураһын үҙгәртә, һөҙөмтәлә тирелә иртә һырҙар барлыҡҡа килә. **38.** Катаракта үҫешен тиҙләтә. **39.** Сәс ҡойолоуға килтерә.

**Марат ИШМӨХӘМӘТОВ.**

✓ Шундай матур милли кейемдәрегеҙҙе ташлап, Европаса кейенергә тырышыуығыҙ аптырата, - тип дауам итә чех.- Милли аштарығыҙ иҫ киткес, ә һеҙ ете диңгеҙ аръяғынан килтерелгән ризыҡтар ашап маташаһығыҙ.



ӘЙҘӘ, ФЕКЕРЛӘШӘЙЕК!

# ҠУНАҠСЫЛЛЫҠ...

## гонаһҡа әйләнмәһен

**Гөлсөм Өмөтбаеваның гәзиттең үткән 29-сы һанындағы "Ҡунаҡсыллыҡ яҡшы, тик..." тигән сығышы ысынлап та уйландырҙы. Беҙ күп ваҡыт үҙебеҙҙең матур сифаттарыбыҙ тураһында уйламайбыҙ, шулай тейеш, тигән һымаҡ йәшәп тик ятабыҙ шул. Ситтәр килеп күҙгә элеп, күккә сөймәһә, матур йолаларыбыҙҙы ла баһалай белмәй йәшәп тик ятыр инек әле.**

Бер йылды Баймаҡҡа чех ғалимы килгәйне. Этнолог ине ул, башҡорт халҡының этнографияһы менән ҡыҙыҡһынып, йолаларыбыҙҙы өйрәнеп йөрөп ята ине. Һөйләшеп киттек. "Беҙҙең яҡтарҙа, беҙҙең халыҡта ниҙәр ҡыҙыҡлы һеҙҙең өсөн?" тип һорайбыҙ.

- Ҡыҙыҡлы, уникаль йолаларығыҙ, ғәҙәттәрегеҙ булған, - тип һөйләп китә чех.- Тик күптәре йәнәшәгеҙҙәге башҡа халыҡтар йоғонтоһонда үҙгәргән, юғалған. Күп кенә ҡылыҡ-ғәҙәттәрҙе, динегеҙ тыйһа ла, урыҫ халҡынан да үҙләштергәнһегеҙ. Әммә башҡортта үҙгәрешһеҙ ҡалған бер сифат - ул ҡунаҡсыллыҡ. Был сифатығыҙ мине тәүге мәлдә бик ныҡ аптыратты. Мин һеҙҙең ил буйлап үҙ яйыма, автостоп менән йөрөп ятам. Ҡайһы ғына ауылға барып, ҡайһы ғына өй янына туҡтаһам да, документтарымды ла, исем-атымды ла, ниндәй йомош менән йөрөүемде лә һорап тормайҙар, өйгә инергә, сәй эсергә саҡыралар. Ашаталар, эсерәләр. Һеҙҙең халыҡ иҫ киткес ихлас һәм йомарт...

- Атай-әсәйҙәр, олатай-өләсәйҙәрҙән, нәҫелдән килә инде беҙҙә былдай йола, сифаттар. Ә бына һеҙ ата-әсәләрегеҙҙән ниндәй сифат, мираҫ күсереп алаһығыҙ үҙегеҙгә?- тип ҡыҙыҡһынабыҙ тағы ла.

- Бына мин мәктәпте тамамлап, өйҙән сығып киттем һәм шул минутта атай-әсәй менән бәйләнеш тә өҙөлдө, - тип һөйләп китә чех. - Улар артабан минең нисек йәшәүем, нимә ашауым, нимә кейеүем тураһында һорашмай ҙа, белмәй ҙә. Беҙҙә шулай: ваҡыты еткәс, һәр йәш кеше үҙ көнөн үҙе күрә. Ата-әсә балаһы өсөн яуап бирмәй, бала ата-әсәһе өсөн шулай уҡ яуаплы түгел. Ә һеҙҙәге тағы бер сифат аптырата: атай-әсәй үҫеп буй еткергән балаһын да күҙҙән ысҡындырмай, уның тураһында хәстәрләй, уны ҡәҙер итә, уның өсөн борсола, уның өсөн барыһын да эшләй. Быуындар бәйләнеше дауам итә һәм был бик яҡшы. Ә бына беҙҙә ундай туғанлыҡ бәйләнештәре ныҡлы түгел...

- Беҙҙәге нимәләр аптыратамы һуң һеҙҙе?

- Шундай матур милли кейемдәрегеҙҙе ташлап, Европаса кейенергә тырышыуығыҙ аптырата, - тип дауам итә чех.- Милли аштарығыҙ иҫ киткес, ә һеҙ ете диңгеҙ аръяғынан килтерелгән ризыҡтар ашап маташаһығыҙ. Унан һуң, мин һеҙҙең ат ите ашағанға аптырайым. Беҙҙә уны аслыҡ булғанда ғына ашарға рөхсәт иткәндәр...

Бына шулай ҡыҙыҡ әңгәмә ҡороп алғайныҡ чех ғалимы менән. Шунан беҙ уны, ғәҙәтебеҙсә, сәй өҫтәленә ултырырға ҡыҫтай башланыҡ. Беҙҙә ҡунаҡсыллыҡтың бер ниндәй режимы ла, ваҡыты ла, шарттары ла юҡ, ҡунаҡ өйөңә ҡайһы мәлдә килеп инә, шул ваҡытта табын әҙерләй һалына бит инде. Ә бына чех ҡунағыбыҙ табынға ултырыуҙан баш тартты: "Мин режим менән ашайым, әле ашау ваҡытым етмәгән, - тине.- Мөмкин булһа, мин был ризыҡтарҙы үҙем менән алып китермен һәм үҙ ваҡытым еткәс, ашармын", - тине. Беҙ, әлбиттә, уның үтенесен ҡәнәғәтләндерҙек һәм күп итеп күстәнәстәр биреп ебәрҙек...

Гөлсөм Өмөтбаеваның яҙғандары ошо ваҡиғаны иҫкә төшөрҙө. Эйе, ҡунаҡсыллыҡ, йөртөңә килгән кешене ҡәҙер итеү - иң күркәм йолабыҙ беҙҙең. Ул һәр башҡорт өсөн яҙылмаған закон. Шундай риүәйәтме, хәҙисме бар бит. Бер кеше вафат булып, әхирәткә күскәс, Аллаһ уға: "Һинең теге донъялағы гонаһтарың байтаҡ ыйылған, - ти. - Бына, мәсәлән, мин ауырып ятҡанда һин инеп хәлемде лә белмәнең..." "Мин һинә генә табындым, Аллам, һине генә уйлап йәшәнем, ауырып ятҡаныңды белһәм, яныңа килмәҫ инемме ни?"- тип аптырап кеше. "Ана, күршеңдә генә бер ҡарт ныҡ итеп ауырып ятты, шул бит мин инем", - ти Аллаһ. Шунан тағы дауам итә: "Асыҡҡанда һин минә ризыҡ та бирмәнең", - ти. Кешенең: "Нисек инде..."- тип аптырауына ҡаршы Аллаһ: "Ана бер кисте һинең ишегеңде бер мосафир шаҡып, бер тәғәм ризыҡ һорағайны, уны һин бороп сығарҙың - ул бит мин инем..." - ти. Бына шулай, Алла менән күңел яҡынлығы булған башҡорт был йоланы ҡулынан килгәнсә атҡарырға тырыша. Ҡунаҡсыллыҡ - ул беҙҙең рухи байлыҡ. Тик бөгөн ҡунаҡсыллыҡты икенсе юҫыҡҡа бороп, күп итеп араҡы эсереп һыйлау тип ҡабул иткәндәр күбәйеп бара. Был инде ҡунаҡсыллыҡ түгел, ә үҙеңә гонаһ туплау ғына. Теге донъяла уның яҙаһы ҡаты буласаҡ. Әйҙәгеҙ, ошо турала ла һөйләшәйек әле. Фекерҙе кем ялғап алып китер икән?

**Луиза ҠАҺАРМАНОВА.**

АТА-ӘСӘЛӘР ЙЫЙЫЛЫШЫ

**Оҙайлы йәйге каникулдың һуңғы айы ғына ҡалды. Балалар өсөн уның үтеп барыуы әлегә бик һиҙелмәһә лә, август - уларҙың атай-әсәһе өсөн тынғыһыҙ осор. Мәктәп йәшендәге балаһы булғандар уны яңы уҡыу йылына әҙерләү ярайһы мәшәҡәтле эш икәнлеген яҡшы белә. Уҡыу кәрәк-ярағы, кәнсә тауарҙары, өҫ һәм аяҡ кейемдәренә ҡытлыҡ юҡ бөгөн, шөкөр, әммә шул һайлап алыу мөмкинлеге ҙур булыуы айырым мәшәҡәт тыуҙыра ла инде. Ата-әсәһе алырға теләгәне балаға оҡшамай, балаһы теләгәнде ата-әсә теләмәй. Билдәле инде, ата-әсә күберәк үҙенең финанс мөмкинлегенән сығып эш итә. Ә үҫмерҙә был осраҡта башҡаларҙан айырылып тороу теләге өҫкә сыға.**

# МӘКТӘП ФОРМАҺЫМЫ...

## әллә ирекле кейемме?



Күптән түгел ҡала сауҙа үҙәктәренең береһендә мәктәпкә кейем алған әсәй менән ҡыҙының һөйләшеүенә шаһит булғайным. Былтырҙан ҡалған блузкаларҙың хаҡы яңы килтерелгәндәренә ҡарағанда ике тапҡырға арзан булғанға күрә, әсәһе ҡыҙына шуныһын алып бирергә теләй. Ҡыҙы иһә күҙ йәштәре менән яңы модалыһын алыуын үтенә, тегенеһен класташтары үткән уҡыу йылында уҡ кейеп туҙҙырыуы тураһында әйтә. Юбкаһын да, туфлийын да былтырғыһын кейергә риза, тик ошо асыҡ түшле, тәнгә һылашып торған, күпертеп бәйләнгән селтәрҙән тегелгән блузканы ғына алһын әсәһе! Һатыусы ла ҡыҙҙың һалпы яғына һалам ҡыҫтыра: блузканы, имеш, кисә генә сит илдән берҙән-бер дана ғына алып ҡайтҡандар. Былдай кейем класта, мәктәптә генә түгел, хатта районда уныҡы ғына буласаҡ. Ҡыҙсыҡ ялбарыулы күҙҙәрен әсәһенә йүнәлтә, уныһы, билдәле инде, ҡыҙының был ҡарашын күтәрә алмай, ике ут араһында ҡалды. Әсәй менән ҡыҙ араһындағы көсөргәнешле хәлде тарҡатып ебәргем килде:

- Ысынлап та, ҡайһылай матур кейем,- уларға яҡын килдем. - Тик ҡайҙа кейергә уйлайһың һуң уны? Бигерәк үтә күренмәле, үҙе кәүҙәңде ныҡ һығып тора.

Ҡыҙ асыҡ иҙеүен ябырға теләп, яғаһын тегеләй-былай тарҡыланы.

- Әйләнгән һайын төҙәтеп, тартып йөрөй торған кейем тиҙ ялҡыта ул. Мәктәп кейеме, иң беренсе, унайлы булырға тейеш,- тим.

- Мәктәп формаһы ғына индереп ҡуймайҙар, йыл һайын нимә алырға икән тип, аптырала ла йөрөлә, - тине әсә.

Һатыусы ла уның һүҙен ҡеүәтләгән булды. Ҡайһы берҙә сит кешенең әйткәне нығыраҡ тәьҫир итә бит ул: тәүҙә үҙ һүҙле булып күренгән ҡыҙыҡай ҙа бер аҙҙан икенсе блузкаларҙы ҡарай башланы...

Һуңғы йылдарҙа берҙәм мәктәп формаһын яңынан индереү тураһында һүҙ йыш ҡуйыра. Уның өҫтөнлөгән уҡытыусылар ғына түгел, атай-әсәйҙәр, хатта уҡыусылар ҙа аңлай бөгөн. Билдәле булыуынса, мәктәп формаһы үткән быуаттың туҡһанынсы йылдары башында бөтөрөлдө. Магазиндағы буш кәштәләр, дефицит, күп айҙар аҡса алмай бушҡа эшләү генә түгел, мәктәптәрҙәге ирекле кейемдәге, йәғни кем нимә теләй, шуны кейгән балалар, нисектер, илдең ҡыҙғаныс хәлен күрһәткән һымаҡ хәтерҙә ҡалған.

"Аҫты - ҡара, өҫкө яғы аҡ булырға тейеш" талабы ҡуйылһа ла, "ирекле" тигән һүҙ балаларға ла, уларҙың атай-әсәһенә лә башҡасараҡ тәьҫир итә ине. Иң беренсе "ирекле кейем"дең йоғонтоһон уҡытыусылар тойғандыр, тиһәм, бер ҙә яңылышмаҫмын. Нимә теләй, шуны кейгән балалар дәрестә лә үҙҙәрен иркен тоторға маташмай ҡалмағандыр. Йәнә социаль тигеҙһеҙлек тигән төшөнсә лә булды. Хәлле йәшәгәндәрҙең балалары үҙҙәренән насарыраҡ кейенгән йәштәштәрен генә түгел, хатта уҡытыусыларҙы ла (ул ваҡытта, бөтәһе кеүек үк, педагогтар ҙа бер нисәшәр ай эш хаҡы алмай эшләне) кәмһетеп ҡарай төҫлө ине. Ҡыҫып торған джинсыларҙы, тар, ҡыҫҡа юбкаларҙы инҡар итеүсе врачтар, педагогтар, психологтар менән бер рәттән, ирекле кейем яҡлылар ҙа байтаҡ булды һәм әле лә бар. Ундайҙар ирекле кейем уҡыусыларҙа үҙен азат, ирекле итеп тойорға ярҙам итә, тигән фекерҙә. Бала үҙен индивидуаль, берҙән-бер, азат итеп тойоуға берҙәм мәктәп формаһы нимәһе менән ҡамасаулай һуң? Минеңсә, улар тиҫтерҙәренән кейеме менән түгел, ә аҡылы, отҡорлоғо, таланты, тәртибе менән айырылһа, яҡшыраҡтыр һымаҡ.

Беҙҙең Мәләүез районы-ҡалаһы мәктәптәренә килгәндә, һәр мәктәп ата-әсәләр йыйылышында дөйөм ҡарарға килеп, уҡыусылары ниндәй кейемдә булыуын үҙе билдәләй. Бында, әлбиттә, үрҙә әйтеп китеүебеҙсә, "аҫ яғы - ҡара, өҫ яғы - аҡ" принцибы өҫтөнлөк итә. Әйткәндәй, башланғыс мәктәптәрҙең бөтәһе лә берҙәм формаға күскән. Күсеү процесы районда 2009 йылда уҡ йәйлап башланғайны инде. 2011 йылда уға урта звено ҡушылды. Һәр уҡыу йорто атай-әсәйҙәрҙең финанс мөмкинлегенән, балаларҙың индивидуаллегенән сығып эш итә, төҫөн, фасонын һайлау мөмкинлеген ҡалдыра. Был йәһәттән Санкт-Петербург, Өфө, Стәрлетамаҡ трикотаж фабрикалары, шулай уҡ ҡала ательелары менән тығыҙ бәйләнеш булдырылған. Бөгөн улар төрлө фасонлы, төҫлө мәктәп формалары тәҡдим итә, заказ буйынса тегә. Башланғыс кластарҙан тыш, Кинйә Арыҫланов исемендәге 9-сы башҡорт гимназияһы, мәктәп-интернат тулыһынса берҙәм кейемгә күскән.

**Шулай итеп, атай-әсәйҙәр, үҙегеҙ һайлағыҙ: балағыҙға мәктәп формаһы алырғамы, әллә ирекле кейемгә өҫтөнлөк бирергәме? Фекерҙәрегеҙ булһа, яҙып та ебәрегеҙ.**

**Лена АБДРАХМАНОВА.**
**Мәләүез ҡалаһы.**

ФАРАЗ

# ҠЫҢҒЫРТАУ СЕРЕ

**Баймаҡ районының Байыш ауылы эргәһендә Ҡыңғыртау тигән бик тә бейек тау бар. Тауҙың атамаһына килгәндә, "ҡыңғыр" һүҙе боронғо башҡорт телендә "арҡыры" тигәнде аңлата. Ҡайһы бер төрки телдәрендә "арҡыры" мәғәнәһендә был "ҡыңғыр" һүҙе әле булһа ҡулланылышта йөрөй. Ысынлап та, Ҡыңғыртау Ирәндек теҙмәләренә арҡырыраҡ ята, атамаһы ла шунандыр.**

Башында ҙур-ҙур, бер нисә метрлыҡ йомортҡа рәүешендәге таштар ятыуы менән Ҡыңғыртау Ирәндек тауҙары теҙмәһендәге бүтән тауҙарҙан айырылып тора. Был йоморо таштарҙың ҡайһы берәүҙәре икегә ярылған. Ирәндек тауҙарындағы таштар бөтөнләй икенсе формала, бындай йоморо таштар башҡа урында юҡ. Ниндәй көс-ҡеүәт, ҡөҙрәт был йоморо таштарҙы тау башына тәгәрәтеп мендереп һалды икән? Яҡын-тирәлә улар ҡолап төшөрлөк тау-таш юҡ. Әгәр ҡасандыр был тау башында бейек-бейек ҡаяташтар булһа, уларҙың эҙҙәре ҡалыр ине, ә тау башы тип-тигеҙ. Ҡаяташтарҙан айырылып төшһәләр, был таштарҙың формалары барыбер улай йоморо булмаҫ ине. Ул таштарҙың барлыҡҡа килеүен асыҡларға теләп, геологтарға мөрәжәғәт итеүҙәр бер мәғлүмәт тә бирмәне. Геологтар, беҙҙең яҡтарҙа бындай оло-оло таштарҙы тәгәрәтеп йөрөтөп шымартып, йомортҡа рәүеше бирерлек боҙлоҡтар булмаған, тинеләр. Әлеге таштарға йомортҡа кеүек йоморо формаһы кеше ҡулдары биргән булырға тейеш, тигән раҫлауҙы күптәрҙән ишеттем. Ысынлап та, был йоморо таштарҙы тау башына боронғо заман кешеләре ниндәйҙер ритуал үткәреү маҡсатында тәгәрәтеп мендергәндәрҙер, тип уйларға урын бар.

Боронғо кешеләрҙең мифологик ҡараштары буйынса, донъя, йәнәһе, йомортҡанан яралған. Тәүҙә ҡоро ер бөтөнләй булмай. Бөтә ерҙә тик һыу ғына була. Ҡайҙандыр өйрәк килеп сығып, һыу аҫтына сумып, өҫкә лай ташый һәм унан бәләкәйерәк бер уба өйөп, шуның өҫтөндә оя ҡороп, йомортҡа һала һәм ике өйрәк себеше тыуа. Ошонан башлана ла инде, боронғоларҙың уйынса, донъяның башы.

Ғалимдар әйтеүенә ҡарағанда, бындай мифологик ҡараш Евразия һәм дә Америка ҡитғаларының төрлө телдәр төркөмөнә ҡараған эрелеваҡлы халыҡтары араһында киң таралған. Ҡыңғыртау һәм уның башындағы йомортҡаға оҡшатып шымартылған йоморо таштар ошо донъя яралған мәлгә бер иллюстрациялыр, тип уйларға була. Ҡыңғыртау үҙе - баяғы өйрәк һыу төбөнән соҡоп өҫкә сығарып өйгән ҡомдо, йәғни тәү убаны һынландырһа, йоморо таштар иһә донъяның башы буласаҡ йомортҡалар, тип аңларға кәрәктер. Ҡайһы бер таштарҙың икегә ярылған булыуына ҡарағанда, уларҙы махсус рәүештә, ниндәйҙер йолаларҙы үтәп ярғандарҙыр, тип әйтергә була кеүек.

Мәҫәлән, башҡорт һабантуйында күҙҙәрҙе бәйләп көршәк ватыу йолаһын бер мәҙәк күреп тамаша ҡылабыҙ. Әммә боронғо замандарҙа был тамаша бер ҙә мәҙәк өсөн үтәлмәгән. Боронғо, мифологик аң хөкөм һөргән замандарҙа ата-бабаларыбыҙ көршәк ватыуға йомортҡанан донъяның яралыуы кеүегерәк мәғәнә һалған. Ысынында, башҡорттарҙың бик боронғо замандарҙан үткәреп килгән яҙғы һабантуйы донъя яралған мәл тураһындағы мифтарҙы һынландырып үтәлгән йолаларҙан торған оло бер спектакль ул. Ошо йолаларҙың береһе йомортҡа ярылып, унан донъяның башланып китеүен һынландыра.

Күрәһең, бик тә боронғо замандарҙа, ата-бабаларыбыҙ иртә яҙ башында Ҡыңғыртау башына таштан юнып яһалған йомортҡаны мендереп, һабантуйҙағы кеүек йолаларҙы үтәп, шул иҫәптән ташты ярып, үҙҙәренең донъяларын яңыртып, байрам иткәндәрҙер. Хәҙер иһә йоморо таштар шул замандарҙың өнһөҙ шаһиттары булып ята бирәләр.

Әйҙәгеҙ, үҙ еребеҙҙең һәр бер ташына иғтибарлы булайыҡ, битарафлыҡ күрһәтмәйек уларға. Әгәр иғтибарлыраҡ булһаҡ, Уралыбыҙҙың һәр ташы беҙгә ата-бабаларыбыҙ тарихын һөйләй. Сит-яттарға улар асылмаҫ, ә беҙгә үҙ телебеҙҙә өндәшерҙәр, йә иһә ымлап булһа ла аңғартырҙар.

Әйткәндәй, Ҡыңғыртау һәм ундағы таштар тураһында баймаҡтарҙың үҙҙәренең ниндәй фараздары бар икән? Беҙгә хәбәр итһәләр ине шул хаҡта.

**Закирйән ӘМИНЕВ,**
**ғилми хеҙмәткәр, этнограф.**



БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



## ЫРЫУҘАРҘЫҢ... өс тағаны

**Башҡорттарҙа ырыу-ҡәбиләләр күп, әммә улар үҙ-ара ниндәй бәйләнештә булған, нисек ойошҡан һуң? Раил Кузеевтың фәнни хеҙмәттәренә нигеҙләнеп, тарихсылар башҡорт халҡын формалаштырған төп ырыуара, этник субстраттарҙы (төркөмдәрҙе) айырып ҡарай.**

Субстрат - ул билдәле бер этно-мәҙәни пласт. Йәғни айырым ырыу йәки ырыуҙар төркөмө башҡаларҙан үҙенең менталитеты, ғөрөф-ғәҙәттәре, йола-традициялары менән айырылып тора. Ул башҡа этно-мәҙәни пластар менән бәйләнешкә инеп, үҙ аллы халыҡ булып формалашмай, әммә шул халыҡтың барлыҡҡа килеүендә ҡатнашып, уның бер субстраты булып тора.

Башҡорт ырыуҙары өс төп субстраттан тора. Беренсеһе - боронғо башҡорт пласты тигән атама менән йөрөй. Ул шартлы рәүештә үҙе ике өлөшкә - төньяҡ һәм көньяҡ ырыуҙарына бүленә. Төньяҡ ырыуға ғәйнә, йәнәй, юрми, юрматылар ҡараһа, көньяҡ өлөшкә бөрйән, үҫәргән, тамъян ырыуҙары индерелә.

Икенсе пласт ҡыпсаҡтар миграцияһы менән бәйле. Ҡыпсаҡтар башҡорт ерҙәренә 10-сы быуатта уҡ күсенә башлай. Миграцияның иң әүҙем осоро иһә 14-се быуатҡа тура килә. Ҡыпсаҡ ырыуҙары Уралдың көнбайыш яғындағы даланы, Ағиҙел, Дим буйҙарын биләп ала. Мал-тыуар көтөр, йәйләүҙәргә сығыр өсөн был иң уңышлы ерҙәр була. Йылан, ҡаңлы, мең, гәрәй ырыуҙары килеп сығышы буйынса барыһы ла ҡыпсаҡтар.

Өсөнсө пласт - Алтын урҙа осоронда барлыҡҡа килгән табын конфедерацияһы. Фәнни телдә ул "башҡорт этногенезының Урал алды ареалы" тигән төшөнсә менән атала. Йәғни табындар көнсығыш дала ерҙәрен биләп ултыра. Көньяҡ Уралда, шулай итеп, ике сәйәси гегемония барлыҡҡа килә. Ҡыпсаҡтар көнбайыш ерҙәрен үҙ ҡулында тотһа, табындар урындағы башҡорт ырыуҙарын үҙ составына индереп һәм шуның иҫәбенә ҙурайып, Уралдың көнсығыш өлөшөн контролдә тота. Шуға ла хәҙерге Ғафури, Архангел райондарындағы боронғо башҡорт ҡәбиләләре - кәлсер, йомран һәм башҡа ырыуҙар табын исеме менән йөрөй.

Боронғо башҡорт пласына ҡараған төньяҡ ырыуҙарҙы эске башҡорттар, ә көньяҡ ҡәбиләләрҙе тышҡы башҡорттар (йәғни тышҡы донъя - башҡа халыҡтар менән бәйләнеш тотҡандар) тип атайҙар. Эске һәм тышҡы башҡорттар үҙ-ара Башғард-Бөрйән союзын тәшкил иткән, тигән ҡараш йәшәй. Әммә был фекер бөгөнгәсә ныҡлы дәлилләнмәгән әле. Күп кенә тикшеренеүселәр, шул иҫәптән Р. Кузеев, Н. Мәжитов тышҡы башҡорттарҙы бәшәнәктәр менән бәйләй. Бәлки, улар бәшәнәк халҡының бер өлөшө, йә булмаһа союздаштары булып торғандыр. Эске йәки төньяҡ башҡорттар күбеһенсә ер эшкәртеү менән шөғөлләнгән һәм Болғар дәүләте менән бәйләнештә булған. Р. Кузеев уларҙы сығышы менән болғар-мадьярҙар, тип атай. Әммә был бик бәхәсле термин. Шулай ҙа тарихсылар әлегә ошо төшөнсәне ҡуллана.

**Юлдаш ЙОСОПОВ,**
**тарих фәндәре кандидаты.**
**(Дауамы бар).**

✓ ***"Был бит беҙҙең башҡорттар хаҡындағы фильм" тигәйне уны ҡарағандан һуң режиссер Булат Йосопов. Джеймс Камерон фильмды төшөргән ваҡытта Ираҡта барған ваҡиғаларҙы күҙ уңында тотҡаны ла һиҙелә.***



**Ваҡыт Лениндың "Сәнғәттәрҙең араһында иң мөһимдәренең береһе - кино" тигән һүҙҙәренең хаҡлығын раҫлай килә. Кеше иғтибары ҡағыҙҙан экранға күскән XX быуатта ла, интернет хөкөм һөргән егерме беренсе мәғлүмәт быуат башында ла кино үҙенең әһәмиәтен юғалтмай, иң абруйлы сәнғәт төрө булып ҡала килә. Бөгөн ер кешеһенең экранға текәлмәгән, кино ҡарамаған көнө юҡ. Каналдарҙың да һәм киноларҙың да ниндәйе генә юҡ хәҙер. Һуңғы ике тиҫтә йыл эсендә беҙгә тәҡдим ителгән кинотаҫмаларҙа барған ваҡиғалар кешелектең гуманлылыҡ принциптарынан ныҡ алыҫлаша барған бер ваҡытта башҡорт милли киноһы сәнғәтенең барлыҡҡа килеүе һәм йылдам үҫеш алыуы ҡыуаныслы, әлбиттә. Ысынлап та, бармы һәм ниндәй кимәлдә һуң башҡорт киноһы? Уның үҫеш перспективалары ниндәй? Киләсәктә беҙ үҙебеҙҙең ерлек, милли рух хаҡында ниндәй киноларҙы күрергә теләйбеҙ һәм ундай киноларҙың дөйөм кешелек ихтыяжы менән тап килеүе мөһимме? Һуңғы ваҡытта күп кенә конкурстарҙа, фестивалдәрҙә ҙур уңыш ҡаҙанған "Еңмеш" фильмының уңыш сере ниҙә? Ошо һәм башҡа һорауҙарға "Башҡортостан" киностудияһы режиссеры Таңсулпан БУРАҠАЕВА һәм Санкт-Петербург кино һәм телевидение дәүләт университеты студенты, режиссер Айнур АСҠАРОВ менән яуаптар эҙләйбеҙ.**

▸ **Быуаттан ашыу тарихы булған донъя кино сәнғәте янында башҡорт киноһы үҙен нисек тоя? Беҙ уны тулыһынса формалашып бөткән кино сәнғәте тип әйтә алабыҙмы?**

**АЙНУР:** Кинобыҙҙы ғына түгел, үҙебеҙҙе лә белмәүселәр донъяла күп. Бар донъя кимәле-

**ризыр. Шулай түгелме? Беҙ ошоно шәхес һәм дәүләт кимәлендә аңларлыҡ дәрәжәгә үҫешеп еттекме икән?**

**АЙНУР:** Ҡатмарлы һорау. Әлбиттә, милләт тормошоноң һәр тармағы үҫеше һәм уның синтезы бәхәсһеҙ. Шул уҡ ваҡытта, дөйөм алғанда, кино тө-

күпкә ҡулайыраҡ. Миненсә, хәҙерге кино кешелектең дөйөм интеллектуаль кимәленә әллә ни бәйләнмәйҙер ҙә. Әйтәйек, мәҙәниәт түбән икән, мәҙәниһеҙлек хаҡында ла фильм төшөрәләр хәҙер. Шуға күрә мин бында синтезды шартлы төшөнсәләр тип аңлайым.

**төшөрә. Был фильм беҙҙең халыҡтың аңында һәм рухында эволюцияға тиң була. Башҡорт кавалерия дивизияһы һуғышсылары яуға инер алдынан шул фильмды ҡарай торған була. Мәскәү, Ленинград малайҙары һуғыш алдынан фильмды ҡарап, "Салаватка" уйыны уйнай. Уйлап ҡараһаң, бер генә фильм бер ниндәй ҙә дәүләт институты башҡара алмаған ҙур эште башҡарған һәм башҡара, сөнки беҙ һаман да шул фильмды ҡарап рухланабыҙ. Беҙҙең әле Салауаттан башҡа ла күпме батырҙарыбыҙ, данлыҡлы тарихыбыҙ, бай мираҫлы мәҙниәтебеҙ бар. 1812 йылғы Ватан һуғышын йә булмаһа Бөйөк Ватан һуғышын ғына алайыҡ. Ниңә, беҙ режиссер Мэл Гибсон төшөргән фильмдар кимәлендәге үҙебеҙҙе бар донъяға танытҡан фильмдар төшөрә алмайбыҙмы ни? Бының өсөн мотлаҡ Мэл Гибсондың үҙен**

уат Юлаев хаҡындағы фильм американлы өсөн дә, африканлы өсөн дә ҡыҙыҡлы һәм кәрәк булырға тейеш. Бар донъяны шаулатҡан "Аватар" фильмының уңыш сере нимәлә һуң? Унда, әлбиттә, технология ла ҙур роль уйнай, әммә фильмды ҡараған һәр кеше унда үҙенең халҡын күрә. "Был бит беҙҙең башҡорттар хаҡындағы фильм" тигәйне уны ҡарағандан һуң режиссер Булат Йосопов. Джеймс Камерон фильмды төшөргән ваҡытта Ираҡта барған ваҡиғаларҙы күҙ уңында тотҡаны ла һиҙелә.

Тап шуның кеүек, беҙ әгәр ҙә Салауат Юлаев хаҡында фильм төшөрһәк, унда барлыҡ кешелекте борсоған проблемалар күтәрелергә тейеш. Әгәр ҙә беҙ ул фильмды башҡорт ихтилалы, һуғыш темалары юҫығында ғына төшөрһәк, фильм тик башҡорттар өсөн генә ҡыҙыҡлы буласаҡ. Миненсә, башҡорт ихтилалы, азатлыҡ өсөн көрәш, һу-

# "УРАЛ БАТЫР" НӘФИС

## һәр башҡортҡа ун һумға

нән ҡарағанда, башҡорт киноһы юҡ тип әйтергә лә була. Сөнки теге йәки был милләт хаҡында донъяла уның киноһына ҡарап та фекер йөрөтәләр хәҙер. Башҡорт кино сәнғәте булһын өсөн уның кинематографы, индустрияһы булыуы шарт. Әйтәйек, ҡаҙаҡтарҙың кино сәнғәте бар, сөнки улар айырым дәүләт булып йәшәй. Башҡорт киноһы әле яралмыш хәлендә генә.

**ТАҢСУЛПАН:** Миненсә, башҡорт кино сәнғәте бар. Беҙ ни өсөн кино сәнғәттәре күптән формалашып бөткән милләттәр, дәүләттәр менән үҙебеҙҙе сағыштырып, кәмһенеү тойғоһо кисерергә тейеш әле? Беҙҙең киностудия әле саҡ егерме йәшен тултырған егет йәшендә генә. Ошо йәш егет күҙлегенән ҡарағанда, башҡорт киноһының уңыштары ҙурҙыр тип уйлайым. Сөнки әлеге ваҡытта донъя кимәлендәге конкурстарҙа, фестивалдәрҙә ҡатнашып, енеүгә өлгәшеүсе фильмдарыбыҙҙың булыуы, башҡорт киноһы тигән төшөнсәнең тегендәбында яңғырай башлауы үҙе бер уныш тип уйлайым.

Республикабыҙҙың ҡаҙаҡтарҙыҡы һымаҡ айырым ил булмауы һәм шул сәбәпле бюджетыбыҙҙың ҙур булмауын да иҫәпкә алырға кәрәк. Шундай шарттарҙа ла кинобыҙҙың үҙ йөҙөн таныта килеүе, кимәлен үҫтереүе бик һәйбәт.

▸ **Кино - ул әҙәбиәттең, сәнғәттең, мәҙәниәттең синтезы. Был синтезға шулай уҡ театр, драматургия үҫеше, режиссерлыҡ, актерлыҡ оҫталығы инә. Тимәк, кино сәнғәте үҫешһен өсөн синтездың айырым өлөштәренең дә үҫеше талап ителә. Тимәк, кино үҙе милләттән, дәүләттән тыш айырым ғына үҫешә алмай. Киләсәктә милләттең мәҙәниәте, сәнғәте, әҙәбиәте үҫешһен, ғөмүмән, милләт үҙе үҫешһен, йәшәһен тиһәк, уның киноһы булыуы ла зару-**

шөнсәһе милләт төшөнсәһе параметрҙары менән тап килмәүе лә бар. Әгәр ҙә милли кино, милләттең киноһы хаҡында ғына һүҙ алып барһаҡ, мәсьәлә шулай ҡуйылыр ине. Кино төшөнсәһе бик киң бит ул. Нәфис



**ТАҢСУЛПАН:** Әйтәйек, байтаҡ ҡына халыҡтарҙың киноһы юҡ. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, улар милләт булып йәшәүен дауам итә. Шуға күрә милләткә милләт булып һаҡланыу өсөн уның киноһы булыуы төп шарт булып тора, тигән фекер өҫтөндә уйланырға кәрәк әле. Әгәр ҙә халҡыбыҙҙың бай тарихы, мәҙәниәте бар икән, әйтә торған һүҙебеҙ бар икән, беҙ кино төшөрөргә тейешбеҙ. Әгәр ҙә халыҡтың рухын күтәрерлек фильмдар төшөрәләр икән, был хупланырға ғына тейеш. Режиссер иҡәнебеҙҙе белеп ҡалған һәр кем беҙҙән: "Ҡасан Салауат батырыбыҙ хаҡында фильм төшөрәһегеҙ?"- тип һорай башлай. Ундай мохтажлыҡ бар. Әммә ундай фильмды тиҙ арала төшөрөп булмаясаҡ, сөнки бының өсөн аҡса ла, белгестәр

**саҡырырға кәрәкме ни? Бында да эш аҡсала ғына түгелдер. Ә нимә ҡамасаулай һуң беҙгә?**

**АЙНУР:** Яҡшы кино төшөрөр өсөн иң тәүҙә яҡшы тарих, ваҡиға кәрәк. Ә һуғыштан алда ни өсөн "Салауат Юлаев" фильмын төшөргәндәр һуң? Сөнки ундағы тарих, ваҡиға шул замандың революцион һәм интернациональ идеологияһы өсөн кәрәк булған. Ә бөгөнгөнөң төп идеологияһы нимәлә? Донъяға доллар аша ҡарауҙа. Ә глобаллашеү сәйәсәте өсөн беҙҙең һымаҡ аҙ һанлы халыҡтарҙың тарихын донъя кимәленә күтәреп, фильм төшөрөү ҙә кәрәкмәйҙер. Мин был фаразға ышанмайым һәм ышанғым да килмәй. Сөнки ҡыҙыҡлы тарих ул Африка өсөн

ғыш хәрәкәттәре был фильмда тик фон ғына булыуы мотлаҡ.

**ТАҢСУЛПАН:** Һуңғы ваҡытта Салауат тураһында фильм төшөрөү өсөн Мэл Гибсонды саҡырыу хаҡында бик күп һөйләйҙәр. "Киске Өфө" гәзитендә лә был хаҡта яҙылды. Ә ниңә фәҡәт Мэл Гибсонды саҡырыу хаҡындағы фекер йыш ҡабатлана һуң?

▸ **Аптырағандан ҡабатлайбыҙ инде быны, батырыбыҙ хаҡындағы яңы фильмды көтөп еткерә алмағанға күрә генә. Сөнки Салауатыбыҙ фәҡәт Мэл Гибсон төшөргән фильмдар кимәлендәге фильмға лайыҡлы. Ниңә, ундай фильмдар төшөрөргә беҙ әҙер түгелбеҙме, тәжрибәбеҙ етмәйме?**

**ТАҢСУЛПАН:** Тәжрибәбеҙ ййлап туплана килә. Объектив алғанда, әлеге ваҡытта республикабыҙҙың ҙур фильм эшләргә аҡсаһы юҡ. Икенсенән, белгестәр, кадрҙар мәсьәләһе киҫкен тора. Дөрөҫөн әйткәндә, Салауат тураһында ундай фильм төшөрөргә беҙ әлегә әҙер түгелбеҙ. Шулай ҙа ун йыл элеккегә ҡарағанда беҙ хәҙер фильмдарҙы күберәк төшөрәбеҙ, башҡорт киноһы төшөргән режиссерҙарыбыҙ ҙа ишәйҙе. Ә ситтән саҡырылған режиссер беҙҙең башҡорт фильмын күңеле аша үткәреп төшөрә алырмы? Мэл Гибсон да бик күп фильмдар төшөрҙө. Әммә уның барлыҡ фильмдары араһында иң уңышлыһы - "Храброе сердце". Ни өсөн шулай? Сөнки М.Гибсондың үҙендә шотланд ҡаны бар. Шуға ла ул халҡының аяныслы яҙмышы хаҡындағы фильмды йөрәге аша үткәреп төшөргән. Беҙгә лә ситтән килгән режиссер башҡорт тураһындағы фильмды кәрәкле кимәлдә тө-

> ***Был фильм халыҡ-ара 68 фестивалдә ҡатнашып, 25-ендә ниндәйҙер призға эйә булып, 15-ендә Гран-при яуланы. Уңыштың сәбәбен мин фильмға нигеҙ булған ваҡиғаның бала саҡтан үҙемә ҡағылышлы булыуында ла күрәм. Икенсе сәбәп - ул минең тәүге фильмым булғас, мин унда үҙемде, барлыҡ белгәнемде һалдым. Өсөнсөнән, командам көслө булды, барыһы ла оло ихласлыҡ менән үҙ эшен башҡарҙы. Беҙ был фильмға халҡыбыҙҙың иң күркәм сифаттарын, ихласлығын һала алдыҡ шикелле. "Еңмеш"те миңә тәүҙә урыҫ телендә төшөрөргә тәҡдим иттеләр. Уны башҡортса төшөрөүем дә уңышҡа килтергән ҙур бер сәбәп булды. Европала, мәҫәлән, урыҫ теленең үҙенә генә хас яңғырашы, мәғәнәһе бар. Башҡорт теленә килгәндә, уға ҡарата айырата иғтибар иттеләр. Барыһы ла уның яғымлы, моңло булыуын билдәләй.***

фильмдарға килгәндә, донъяла шундай күренештәр ҙә бар: әйтәйек, махсус белемдәре булмағандар ҙа бына тигән, бар донъя ҡарарлыҡ кино төшөрә ала. Был осраҡта синтез хаҡында фекер йөрөтөп буламы икән? Дөрөҫ, әгәр ҙә милләттең мәҙәни традициялары бай булһа, төшөрөр өсөн материал да бай һәм ҡыҙыҡлы була. Минә, мәҫәлән, профессиональ актерҙар менән эшләүгә ҡарғанда, ябай кешеләр менән эшләүе

ҙә кәрәк. Әммә шуныһы, сценарий авторы ла, режиссер ҙа, төп ролдә башҡарған актер ҙа башҡортса фекерләүе мөһим. Салауат батырыбыҙ хаҡында донъя кимәленә сығарырлыҡ фильм төшөрөү өсөн беҙгә тағы ла егерме йыллап ваҡыт кәрәк әле.

▸ **Бөйөк Ватан һуғышы башланыр алдынан режиссер Яков Протазанов Степан Злобин романы буйынса "Салауат Юлаев" фильмын**

дә, Башҡортостан өсөн дә ҡыҙыҡлы. Бының өсөн кәрәкле аҡсаны ла табырға була, миненсә. Хәҙерге ваҡытта бар донъя киносценарийҙар яҙыусыларға ҡытлыҡ кисерә. Улар бар ерҙә лә етешмәй. Әгәр ҙә беҙ үҙебеҙҙең халыҡтың тарихынан сығып, уны нигеҙ итеп алып, бөтә донъяны ҡыҙыҡтырырлыҡ сценарий яҙа алһаҡ, аҡса ла табып була.

Кино - ул сәнғәт кенә түгел, ә бизнес та. Беҙ төшөрәсәк Сала-

*✓ Ә режиссерҙың эше ана шундай конкурстарҙа һәм фестивалдәрҙә ҡатнашыуы һәм еңеүе менән билдәләнә. Әгәр ҙә ул ҡатнашмай икән, уны хөрт кино тигән аңлау ҙа бар.*

# ФИЛЬМЫН ТӨШӨРӨҮ...

## ғына төшәсәк

шөрә алмаясаҡ. Сөнки Салауат хаҡындағы фильмды мотлаҡ башҡорт кешеһе төшөрөргә тейеш. Ҡаҙаҡтар Абелхәйер хан тураһында "Күскенсе" фильмын төшөрөп ҡараны, әммә көткән уңышына өлгәшә алманы. Ни өсөн? Сөнки унда Әбелхәйер хан ролен немец актеры башҡара. Ул хатта ҡаҙаҡса аяҡ бөкләп ултыра ла белмәй, йөҙө лә Европа кешеһенеке. Икенсе пландағы бәһлеүән кәүҙәле ҡаҙаҡтар янында ул, киреһенсә, меҫкен булып ҡына күренә. Ә беҙ бит тарихтан шуны ла беләбеҙ: Әбелхәйер меҫкен хан булмаған. Ҡыҫҡаһы, уны төп герой, фильмды ҡаҙаҡ фильмы итеп ҡабул итеп булмай. Уның дуҫын африкан ҡаны буталған латинамериканлы актер уйнай. Уны ла ҡаҙаҡ тип ҡабул итеп булмай. Фильмда төп героиняны уйнаған ҡаҙаҡ ҡыҙын ғына фильмдың ерлегенә тап килгән персонаж булараҡ ҡабул итеп була. Төп геройҙар ҡаҙаҡҡа оҡшамағас, был фильм кемдәр тураһында һуң? Минеңсә, фильмдың уңышһыҙ килеп сығыуы тап ошо сәбәпкә бәйле лә. Фильмды ҡаҙаҡ халҡы үҙе ҡабул итмәне. Шуға күрә лә башҡорт фильмы ла башҡортса уйлаған кешеләр тарафынан төшөрөлөргә тейеш.

**▸ Һеҙгә барлыҡ мөмкинлек, шарттар тыуҙырып, Салауат Юлаев хаҡында фильм төшөрөргә ҡушһалар, һеҙҙең Салауат нисегерәк булыр ине?**

**АЙНУР:** Минең Салауатым иң беренсе нәүбәттә ябай һәм әллә ни бейек кәүҙәле булмаған кеше булыр ине. Уның барлыҡ халыҡтарҙы үҙенең артынан эйәртә алырлыҡ көсөнөң сере - шул ябайлыҡта бит инде. Мин үҙ фильмымда ана шул серҙе асыуҙы үҙмаҡсат итеп ҡуйыр инем. Әйтәйек, ҙур кәүҙәле судья ҡулға алынған тәбәнәк, әммә мыҡты кәүҙәле Салауаттан һорау ала. Ошо урында судьяның да, Салауаттың да шәхси сифаттары өҫкә ҡалҡып сығырға һәм сиселергә тейеш.

**ТАҢСУЛПАН:** Мин Салауат тураһында уның тормошон барлыҡ тулылығында сағылдырған фильм төшөрөргә ҡыймаҫ инем. Минең фильмдың нигеҙендә уның тормошоноң бары бер эпизоды ғына ятыр ине. Әйтәйек, Салауаттың һуғышҡа әҙерләнгән мәле. Минең Салауат бер ҡаршылыҡ алдында ла туҡталып ҡалмаған абстракт батыр түгел. Ул барлыҡ кәмселектәре, икеләнеүҙәре булған ябай кеше. Күптәр Салауатты Пугачевтың ысын батша булыуына ышанған тиҙәр. Дөрөҫ түгел, ул күп телдәр белгән уҡымышлы зат, старшина балаһы, шуға күрә Пугачевтың батша булыуына ышанмаған. Ул бер ҡатлы түгел. Етмәһә, тәүҙә ул атаһының ҡушыуы буйынса яугирҙәрен Пугачевҡа ҡаршы һуғышҡан батша ғәскәренә алып барып ҡушырға тейеш була. Әлбиттә, бында ата менән ул араһында бик ҡаты бәхәстәр барғанлығы бәхәсһеҙ. Улар шул бәхәстәр һөҙөмтәһендә яугирҙәрҙе Пугачев ғәскәренә ҡушыу халыҡ яҙмышы өсөн дөрөҫөрәк булыр тигән һығымтаға килгән.

**▸ "Аватар" фильмы тибында беҙҙең "Урал батыр", "Аҡбуҙат" эпостарына нигеҙләнеп фильмдар төшөрөп буламы? Шундайын мәшһүр ҡомартҡыларыбыҙ ҡағыҙға ғына төшкән, театрҙа ғына ҡуйылған рәүешендә ҡалырмы икән ни?**

**АЙНУР:** Аҡса булһа, төшөрөп була. Бәлки, беҙгә: "Башҡорттар, "Урал батыр" тигән фильм төшөрәбеҙ. Һәр ҡайһығыҙ унар һумдан аҡса йыйығыҙ", - тигән өндәмә ташларғалыр? Ә бит һәр башҡорт шунсама аҡса биргән хәлдә лә, шул аҡса фильмды төшөрөргә етер ине. Халыҡ аҡсаһына төшөрөлгән был фильмды һуңынан "Халыҡ киноһы" тип атарға ла мөмкин булыр ине. Тик ул фильмды башҡалар нисек ҡабул итер ине икән? Үкенескә күрә, киноға ҡарата ике төрлө ҡараш бар шул. Тәүгеһе - сәнғәт, әйтәйек, милли кино сәнғәте, икенсеһе - аҡса килтереүсе колонка, нефть ҡачалкаһы. Бында алтын урталыҡты табыу фарыз.

**ТАҢСУЛПАН:** Әлегә беҙҙең кимәл "Урал батыр" кеүек фильмды төшөрөргә мөмкинлек бирмәй. Минеңсә, ундай фильмды әлегә анимация, йәғни мультфильм итеп эшләү күпкә отошлораҡ булыр ине. Сөнки беҙ эпосты тулыһынса аңламайбыҙ һәм уға бәйле күп кенә нәмәләрҙе белмәйбеҙ. Бер нисә йыл элек миңә "Урал батыр" эпосы буйынса иллюстрациялар эшләргә заказ биргәйнеләр. Мин иң һыҙғанып эшкә тотондом. Бер юлы эпосты ентекләберәк өйрәнергә керештем. Һорау тыуҙы: ул заманда кешеләр ниндәй кейемдә булғандар һуң? Тәүтормош осорҙа һуғылған кейемдәр булмаған, кешеләр кейемде тиренән теккән, ян-яҡта диңгеҙ булғас, ундағы ҡабырсаҡтарҙы ла файҙаланған. Артабан китһәк, Ҡатил батшалығы донъяның күп кенә цивилизацияларына параллель, әйтәйек, майяларға, ацтектарға һ.б. Шулай ҡарағанда, шул тиклем бай һәм ҡатмарлы тарихи һәм мәҙәни ҡатламдарға барып юлығаһың. Шуға күрә аптырауға ҡалдым һәм был заказдан баш тарттым. Ә бындай осраҡтарҙа беҙҙең рәссамдар геройҙарға ике ҡойроҡло төлкө бүрек кейҙереп, анһат ҡотола. Беҙ был йәһәттән белем кимәлебеҙҙе үҫтерергә бурыслыбыҙ. Башҡорттар араһында тарих өйрәнеүселәр бик күп, был һәйбәт, әммә милли кейемгә иғтибар итеүселәр бик аҙ.

**▸ Совет осоронда "Грузия-фильм" ҡыҫҡа метражлы, әммә бик ҡыҙыҡлы һәм фәһемле фильмдар төшөрә торғайны. Әйтәйек, махсус машинаға ултырып, 3-4 грузин кешеһе асфальтҡа һыҙыҡ-разметкалар төшөрөп йөрөй. Шунда ҡыҙыҡлы һәм сетерекле хәл-ваҡиғаларға тарыйҙар, ул фильмдарҙы ҡарағандан һуң күңелдә грузин милләте хаҡында яҡты уйҙар ҡала торғайны. Беҙгә лә шундай фильмдар кәрәктер, бәлки?**

**АЙНУР:** Рәсәйҙә ҡыҫҡа метражлы фильмдарға ихтыяж да, иғтибар ҙа юҡ. Бигерәк тә урта һәм өлкән быуын кешеләре ундай фильмдарға йөрөмәй. Ҡыҫҡа метражлы фильмдарҙы мин шиғырға тиңләйем. 10-15 минутлыҡ ҡына фильмдарға ла тотош романдарға һыйырлыҡ фекерҙәрҙе һалырға була бит.

**ТАҢСУЛПАН:** Бөгөн башҡорт киноһына "Юрғанға ҡарап, аяҡ һуҙыу" принцибы тура килер ине. Ыҙаланып, аҡса еткерә алмайынса, унда-бында һуғылып, тулы метражлы фильм төшөргәнсе, рәхәтләнеп ҡыҫҡа метражлы фильм төшөрөү отошло. Күреүебеҙсә, бер нисә йыл эсендә бер нисә ҡыҫҡа метражлы фильм килеп сыҡты һәм улар еңеүгә лә өлгәшә башланы. Мәҫәлән, шундайҙарҙың береһе Айнурҙың "Еңмеш"е.

**▸ Айнур, һинең "Еңмеш" фильмыңдың төп уңыш сере нимәлә тип уйлайһың?**

**АЙНУР:** Был фильм халыҡ-ара 68 фестивалдә ҡатнашып, 25-ендә ниндәйҙер призға эйә булып, 15-ендә Гран-при яуланы. Уңыштың сәбәбен мин фильмға нигеҙ булған ваҡиғаның бала саҡтан үҙемә ҡағылышлы булыуында ла күрәм. Икенсе сәбәп - ул минең тәүге фильмым булғас, мин унда үҙемде, барлыҡ белгәнемде һалдым. Өсөнсөнән, командам көслө булды, барыһы ла оло ихласлыҡ менән үҙ эшен башҡарҙы. Беҙ был фильмға халҡыбыҙҙың иң күркәм сифаттарын, ихласлығын һала алдыҡ шикелле.

"Еңмеш"те миңә тәүҙә урыҫ телендә төшөрөргә тәҡдим иттеләр. Уны башҡортса төшөрөүем дә уңышҡа килтергән ҙур бер сәбәп булды. Европала, мәҫәлән, урыҫ теленең үҙенә генә хас яңғырашы, мәғәнәһе бар. Башҡорт теленә килгәндә, уға ҡарата айырата иғтибар иттеләр. Барыһы ла уның яғымлы, моңло булыуын билдәләй.

**ТАҢСУЛПАН:** "Йөрәктән сыҡҡан ғына йөрәккә етә" тиҙәр. Шуның кеүек, фильм күңел һалып эшләнгән. Айнур үҙе лә шул ерлектән булғас, барыһын да белеп эшләгән. Әгәр ҙә сценарийҙы Голливудтан килгән данлыҡлы режиссерға бирһәләр, ул барыбер Айнур һымаҡ эшләй алмаҫ ине. Мин был фильмды ысын мәғәнәһендәге башҡорт киноһы тип атайым, сөнки унда милли ерлек һәм милли холоҡ, милли характер бар. Төшөрөүсе кеше башҡа милләттән булһа, быны биреү мөмкин түгел. Мин бындай милли ерлекте Айсыуаҡ Йомағоловтың биш минутлыҡ ҡына "Караuат" тигән фильмында ла күргәйнем.

**АЙНУР:** "Еңмеш"тең уңышҡа өлгәшеүенең тағы бер сәбәбе - уны төрлө конкурстарға, фестивалдәргә тәҡдим итеүҙә лә. Беҙҙең режиссерҙар фильм төшөрә лә, шуның менән - вәссәләм. Шуға күрә киностудияла фестивалдәрҙә еңеүгә өлгәшерлек фильмдар тик ята.

**ТАҢСУЛПАН:** Сөнки фильмдарҙы фестивалдәргә ебәреүсе кеше юҡ. Мәшәҡәтле генә эш ул. Һәр фестивалдең анкетаһын тултырырға, фильмды кәрәкле форматта дискыға күсереп яҙырға кәрәк. Мин ике тапҡыр фильмымды ебәрҙем, мәшәҡәтле булыуын бик яҡшы беләм.

**АЙНУР:** Булат Йосопов "13-сө раунд"ты төшөрҙө лә, кәштәгә һалып та ҡуйҙы. Беҙҙә маркетинг хеҙмәте үҫешмәгән шул.

**ТАҢСУЛПАН:** Ә режиссерҙың эше ана шундай конкурстарҙа һәм фестивалдәрҙә ҡатнашыуы һәм еңеүе менән билдәләнә. Әгәр ҙә ул ҡатнашмай икән, уны хөрт кино тигән аңлау ҙа бар. Ҡыҫҡаһы, кино төшөрә беләбеҙ, ә донъяға күрһәтә белмәйбеҙ.

**АЙНУР:** Яҡшы машина һатып алып, уның менән йөрөмәйенсә гаражға бикләп ултыртып ҡуйған һымаҡ инде.

**▸ Әлеге мәлдә ниндәй проекттар өҫтөндә эшләйһегеҙ, ниндәй фильмдар төшөрәһегеҙ?**

**ТАҢСУЛПАН:** Мин әле документаль фильмдарға тотоноп киттем. XVIII быуатҡа ҡағылған башҡорт милли костюмы хаҡында бер фильм төшөрәм. Фильмда бик күп яңы ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр әйтеләсәк, экспонаттар, гравюралар күрһәтеләсәк. Икенсе фильм шул уҡ XVIII быуатҡа ҡағылған "Бер гренадер тарихы" ҡурсаҡ фильмы. Ул тарихи ваҡиғаларға ҡоролған. Унда башҡорт гренадеры көтмәгәндә үҙенең Ҡаҙан губернаһында ҡалған кәләшен осрата. Кәләше шағир Третьяковскийҙа крепостной булып эшләүе хаҡында әйтә һәм башҡорт егете уны ҡотҡарыу юлдарын эҙләй башлай. Был - ҡыҫҡа метражлы фильм, әле уға тотондом ғына.

**АЙНУР:** Мин "Татһыҙ бал" тип аталған документаль фильм төшөрә башланым. Ул минең диплом эше, солоҡсолоҡ тураһында буласаҡ.



*Әлегә беҙҙең кимәл "Урал батыр" кеүек фильмды төшөрөргә мөмкинлек бирмәй. Минеңсә, ундай фильмды әлегә анимация, йәғни мультфильм итеп эшләү күпкә отошлораҡ булыр ине. Сөнки беҙ эпосты тулыһынса аңламайбыҙ һәм уға бәйле күп кенә нәмәләрҙе белмәйбеҙ. Бер нисә йыл элек миңә "Урал батыр" эпосы буйынса иллюстрациялар эшләргә заказ биргәйнеләр. Мин иң һыҙғанып эшкә тотондом. Бер юлы эпосты ентекләберәк өйрәнергә керештем. Һорау тыуҙы: ул заманда кешеләр ниндәй кейемдә булғандар һуң? Тәүтормош осорҙа һуғылған кейемдәр булмаған, кешеләр кейемде тиренән теккән, ян-яҡта диңгеҙ булғас, ундағы ҡабырсаҡтарҙы ла файҙаланған. Артабан китһәк, Ҡатил батшалығы донъяның күп кенә цивилизацияларына параллель, әйтәйек, майяларға, ацтектарға һ.б. Шулай ҡарағанда, шул тиклем бай һәм ҡатмарлы тарихи һәм мәҙәни ҡатламдарға барып юлығаһың. Шуға күрә аптырауға ҡалдым һәм был заказдан баш тарттым.*

### ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Рәсәй киноһы көнө сиктәрендә 27 августан 28 августа ҡараған төндә "Башҡорт киноһы төнө" сараһы уҙғарыласаҡ. Сара "Родина" кинотеатрында киске 22 сәғәттә башланып, таңғы 6-ға тиклем дауам итәсәк. Унда ҡыҫҡа метражлы фильмдар, шул иҫәптән Айнурҙың "Еңмеш"е күрһәтеләсәк. Шулай уҡ Таңсулпан Бураҡаеваның "Кәләш алам" фильмының да презентацияһы үтәсәк. "Башҡорт киноһы төнө"-нә рәхим итегеҙ!**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

**Әмир ӘМИНЕВ**

# Йондоҙ сәскә

## Повесть

- Ҡуйсәле. Бына һиңә ҡараған ошо күҙҙәрем менән күрҙем. - Рәүефтең асыуы килә башланы. - Беҙҙе ҡалдырып киткән йүнәлештән килделәр ҙә урман эсенә инеп юғалдылар. Күп ғәскәр - полк, дивизия ғына барҙыр, күберәк булмаһа... Мин үҙем дә иҫ-аҡыл китеп, ышанмай ҡарап торҙом.

- Ә ниңә мине уятманың? Икәүләп ҡарар инек. - Рәүфә йөҙөндәге ғәжәпләнеү ышанмауға әүерелде. Шуға ла хәбәрҙе шаяртыуға борорға тырышты. - Ҡысҡырып берәйһен саҡырыр инек тә, ишекте астырып, улар менән китеп ҡотолор инек был төрмәнән.

- Йоҡлаһын, тинем шул... Хәйер, мауығып ҡарап онотҡанмын.

- Бер өй эсендәге кешене нисек онотorға була? Ҡыҙыҡ һин. 200 йыл элек йәшәгән кешеләр бөгөн нисек йөрөй алһын? Хәҙер уларҙың һөйәктәре лә серепбөткәндер инде.

- Ышанмаһаң ышанмайһың инде. Ә мин күрҙем. - Рәүеф урынынан тороп уҡ китте.

- Ярай, Рәүеф ағай, юҡҡа бәхәсләшмәйек. Һин күргәнһең, мин - юҡ. Башҡорт тотоп ҡарамайынса ышанмай. Ул ғәскәр, моғайын, кире ҡайтыр, шунда мине мотлаҡ уят, йәме?

Был хәлдән һуң бер нисә көн үткәс, Рәүеф, бәлки, ысынлап та, күҙемә күренгәндер ул ғәскәр, мираж булғандыр, тип шикләнә башланы. Сөнки быны̄ң булыуы мөмкин түгел: 1812 йылғы Ватан һуғышы XXI быуат башына нисек әйләнеп ҡайта алһын?

* * *

Төштән һуң, кискә ҡәҙәр, "ҡара ҡарға"ның ныҡлы күҙәтеүе аҫтында баҡсаны сүптән таҙарттылар, уны өйөп яндырғас, ер ҡаҙҙылар. Был эш Рәүефкә лә, Рәүфәгә лә танһыҡ ине, шуға ла кинәнеп эшләнеләр, әйтерһең дә, үҙҙәренең баҡсаһы. Баҡсаның исеме генә ҡалып бара, ташландыҡ хәлгә еткән. Күрәһең, байтаҡтан бирле кеше ҡулы теймәгән, тейгән хәлдә лә хужаларса ҡыланмағандар. Шунда Рәүеф Рәүфәгә бикләнеүенең тәүге көндәрендә үк иғтибар иткән һәм тәҙрәнән гел ҡарап-күҙәтеп торған йондоҙ сәскәне күрһәтте. Өшөмәһен өсөн төбөнә ҡалын итеп кипкән япраҡ һалдылар. Быға Рәүефтән бигерәк Рәүфә ҡыуанды. Ғөмүмән, ул шаярҙы, көлдө, Рәүефкә тупраҡ киҫәге, кипкән ағас ботаҡтары бәрҙе, унан оҙаҡ итеп һынсыл ҡарап торҙо, йүгереп китте. Хәс тә ҡолонсаҡ, әсәһе эргәһендә булғанға, йәшел үләнгә, иркенлеккә ҡыуанған ҡолонсаҡ! Рәүеф тап бөгөн, баҡсала эшләгән арала, уның быға тиклем күрмәгән-шәйләмәгән кешелек сифаттарын асты, һоҡланды, оҡшатты.

Кистән һәр ҡайһыһы үҙ урынына ятты. Ләкин быны̄ң бөгөн әҙәп һаҡлау өсөн генә икәнен икеһе лә аңлай ине. Рәүфә, хәйерле төн, матур төштәр теләп, бөгәсә йәнә кеше-фәлән күрһәң, Рәүеф ағай, үҙең генә ҡарама, мине лә уят, тип шыңғырҙатып көлдө лә, мут йылмайып, юрғаны аҫтына сумды...

Һәр ҡайһыһы борғоланып, әйләнеп-тулғанып, уфтанып оҙаҡ ятты. Төн уртаһы еткәс, Рәүеф түҙмәне - күпме түҙергә мөмкин, тимерҙән яһалмаған, тере кеше ләһә - ҡомарына хужа була алмай, ҡалҡынды ла карауатҡа ынтылды. Йөрәге күкрәген бүҫеп сығып бара, тәне пружиналай ҡыҫылып, шартлап ысҡыныр хәлгә еткән, әйтерһең дә, быға тиклем ҡатын-ҡыҙҙы бер ҙә татымаған үсмер сағы.

Рәүфә уның уй-ниәтен аңлап, үҙе лә көтөп ятҡан, ахыры: Рәүеф дивандан ҡалҡыныу менән, юрғанын төпкә һирпте лә ҡулдарын һуҙҙы - ирендәр ҡушылды, тәндәр ҡауышты, тын алыуҙары туҡталды, гүйә...

Һабантуйҙа сапҡан аттар шикелле арып-талғас, бер килке өндәшә лә алмай яттылар. Ярһыуҙары яйлап үҙ ярҙарына ҡайтып, хәл йыйғас, Рәүфә стенаға боролдо, һыҡтағаны ишетелде.

- Бәй, аҙашбикә, ни булды? - тине Рәүеф, ҡулын уның яурынбашына һалып. "Аҙаш" тип беренсегә әйтте. Яҡын күреп әйтте. Ҡатын өндәшмәне, шулай ҙа һыҡтауынан туҡтаны.

- Гонаһ ҡылдыҡ бит, - тине, байтаҡ һүҙһеҙ ятҡас.

- Үкенәһеңме әллә? Үкенмә. Беҙ ир менән ҡатын араһында була торған тәбиғи эште башҡарҙыҡ.

- Ҡалай эгоист икәнһең дә. Тәбиғи эш, имеш... Тәбиғи эш - һыйыр һауыу, балалар, өй ҡарау, бесән сабыу. Ә был... бер-береһен яратҡан кешеләр араһында ғына...

- Бер-беребеҙҙе яратабыҙ, тип иҫәпләйек, улайһа. Ҡасандан бирле бергә, бер ҡыйыҡ аҫтындабыҙ, йоҡлап йөрөгән урындарыбыҙ йәнәш. Күпме түҙергә була? Аҡылдан яҙа яҙҙым бит. Ғәфү ит. - Рәүеф бушанды, уға еңел һәм рәхәт. Әммә үҙендә ғәйеп тә һиҙҙе: ҡатын янына үҙе барҙы һәм көсләгән һымағыраҡ килеп сыҡты - ир теләгенә ҡатын ҡаршылашып тора аламы? - Ярай, улай йөрәгеңә яҡын алма, һин ҡатын кеше... Ҡыйын булмағандыр бит...

Рәүфә уның яғына әйләнде, муйынынан һығып ҡосаҡланы.

- Кәнтәй теләмәһә, арлан киләме? - тине, йәнә һыҡтап, унан тәрән көрһөндө лә Рәүефтең ирендәренән, күҙҙәренән үпте. - Ир менән күпме йәшәп, бындай ҙа рәхәтлекте кисергәнем юҡ ине. Үләм икән тип торам. Килтереп япмаһалар, ғүмер буйы быны̄ң ниндәй ләззәт икәнен белмәҫ инем.

Ошо ҡайнар төндән һуң ике төн йәнә айырым йоҡланылар. Рәүеф, ҡатынды рәнйетермен, тип тә уйланы, Сәғиҙәһе алдында ғәйеп тойғоһо кисереүе лә бар ине. Тормош шундай шарт алдына килтереп ҡуйғас, нишләйем, малай түгелмен, тип үҙенең ҡылығын аҡланы ла. Өсөнсө төнөнә, түҙмәй, йәнә карауатҡа тартылды... Бынан ары, ирле-ҡатынлы кеүек, кистән үк бергә яттылар. Яҡынлыҡтары тәүге тапҡырҙағы ише ҡойон, дауыл, ғәрәсәт үк булмаһа ла, һаман да ләззәтле байрам ине.

- Балағыҙ юҡмы ни?

Ҡатындың кәүҙә төҙөлөшө, ҡыҙҙарҙыҡы кеүек тығыҙ тәне бала тапмағанына ишаралаһа ла, ҡыҙыҡ өсөн генә һораны бер төндө Рәүеф.

- Юҡ шул.

- Нисә йыл йәшәйһегеҙ һуң?

- Өс. Дүртенсегә китте.

- Бишәр, унар йыл балаға уҙмағандар ҙа була. Көтөргә, өмөтләнергә...

- Ундайҙар ҙа осраныны? - Тимер зыңы яңғырап китте ҡатын тауышында. Рәүеф, ирекһеҙҙән, көнләшә лә башланы был, тип уйланы. Ҡатын-ҡыҙ ирен һәр саҡ үҙенең шәхси милке иткеһе килә, хатта зинданда ла.

- Булды, тимәйем бит. Уҡып, ишетеп беләм. Кеше араһында йәшәйем дәһә. Ана, беҙҙең ауылдағы йәш уҡытыусыларҙың һигеҙ йыл балалары булманы. Ниндәй генә санаторий, курортҡа йөрөмәне ҡатыны, больницаға ла ятып ҡараны, әбей-һәбей име тиһеңме. Туғыҙынсы йыл тигәндә генә сабыйҙары тыуҙы. Ә минән ҡалһаң, нишләрһең?

- Һинеке, тим инде. Үҙеңсе? Ҡатыныңа ни әйтерһең?

- Мин бит ауырға ҡалмайым.

- Ауылыңа бала күтәреп барһам йәки ҡатының һин ҡайтҡансы бала табып торһа?

Башына килтереп һуҡтылармы ни! Шаҡ итеп ҡалды. Сөнки был турала Рәүеф, ғөмүмән, уйламай ине: башҡа бисәләр йөрөй, ә һинеке - юҡ. Ирҙәр, ғәҙәттә, шулай уйлай. Эйе, ул да, күҙ ҙә йоммай, Рәүфә кеүек, бәй, бала ни - һинән инде, тип яуаплаясаҡ. Туғыҙ ай эсендә булһа, ышанырһың, унан да оҙаҡҡа китһә... Үәт, мәҙәк була инде! Рәүфәнең һорауына яуап бирә алманы Рәүеф, һүҙ тапманы. Шунлыҡтан, асыуы килде лә хәбәрҙе тиҙерәк икенсе юҫыҡҡа төшөрҙө, дөрөҫөрәге, ҡатындың үҙенә ябырылды:

- Һин минең янға махсус ябылған шымсы түгелме ул?

- Аңламаным. - Ҡатын ихлас аптыраны. - Нисек махсус ябылған?

- Ултырған кешенән кәрәк мәғлүмәт алыу, ҡылған енәйәтте фашлау өсөн енәйәтселәр янына икенсе кешене, йәғни "утка" ултырталар. Ул тегенең эс-бауырына керә, ышанысын яулай ҙа ҡылған эшен быға һөйләй.

- Һин әллә шундай ҙур енәйәтсеме? - Рәүфәнең күҙҙәре ҙур асылып, йөҙөнә ҡыҙыллыҡ йүгерҙе. - Ә мине ниңә шпион тип уйлайһың? Әйттем бит, төн йөҙөндә өйөмдән инеп алдылар ҙа һинең янына ҡалдырып киттеләр.

Рәүеф үҙенең шиге нигеҙһеҙ булыуын аңланы. Рәүфә алдамай, эсе таҙа, күңеле балаларҙыҡы һымаҡ керһеҙ. Ай, уйламайыраҡ әйтте, ахыры.

- Юҡ, мин былай ғына, һине һынар өсөн генә... - Ғәйепле йылмайҙы Рәүеф. Күпмелер ваҡытҡа ҡатындың аптырау ҡатыш үпкәле йөҙө үҙгәрмәне, һалҡын көйө ҡалды. Рәүеф ҡосаҡлап күкрәгенә ҡыҫҡас ҡына, йомшарғандай итте.

- Уйнап һөйләһәң дә, уйлап һөйлә, Рәүеф ағай... Рәнйеүем бар. Ошаҡ йөрөтөү, кенә ҡыуыу, кеше артында һөйләү ғәҙәтем юҡ. Шундай яратышҡандан һуң да бындай уй нисек башыңа килгәндер?

- Әйттем бит, юрамал ғына, тип. Ярай, ғәфү ит.

Ҡатын өндәшмәне. Ир кешенең шулай аҡланыуына ышандымы, әллә барыбер ҙә шиге ҡалдымы - Рәүеф быны аңлай алманы. Шиге ҡалған хәлдә, бер уйлаһаң, йәтеш тә, сөнки ул биргән һорауҙы Рәүфә иҫенән сығармаясаҡ, тимәк, Рәүеф һалған ҡармаҡҡа эләккән көйө йөрөйәсәк. Тәүге мәлдә ниндәйҙер уңайһыҙлыҡ кисерһә лә, бер аҙҙан был уйынан арынды, хатта, дөрөҫ эшләнем, тигән ышаныс килде. Ҡатындың кәйефен кире ҡайтарыу өсөн, тел осонда ғына йөрөгән икенсе һорауын бирҙе:

- Ә теге параллель кластағы минең маңҡа аҙаш артабан ҡайҙа булды һуң?

- Үәт, бер нәмәне лә онотмайһың, ә, һин үҙең шпион түгелме икән әле? - Рәүфә йылмайғандай итте. - Ҡайҙа булһын, һыйыр ҡойроғона йәбешкән дегәнәк һымаҡ бер аҙым да арттан ҡалмай йөрөгәс, кейәүгә сығырға мәжбүр булдым мин уға.

Саҡ йығылып китмәне Рәүеф. Рәүфәнең хәбәре буйынса, бер нәмәгә лә эшкинмәгән бүкән тип күҙ алдына килтергәйне ирен. Ошо сибәр ҡатынды ризалата алғас, улай уҡ бешмәгән түгел, тимәк. Ныҡышлығы, әрһеҙлеге, түҙемлеге менән еңгәндер.

- Да-а-а, - Рәүеф тышҡа баҡты. Интриганың шулай ябай ғына тамамланыуы ғәжәпләндерҙе уны, хатта ниңә һорағанына үкенеп тә ҡуйҙы. Ҡыҙыҡһынмаған булһа, сер һаҡланыр, был татлы йәш ҡатынды ҡосоп ятҡан бәхетле ир кем икән, тигән көнсөл уй телгеләр ине күңелен. Хәҙер бөтәһе лә асылды, сер ҡалманы. Хәйер, төптән уйлап ҡараһаң, уға телгеләнергә урын да юҡ: был ҡатын менән ваҡытлыса ғына бергә. Рәүеф - үҙенең Сәғиҙәһенә, Рәүфә Рәүефенә ҡайтҡас, бер-береһен мәңгегә онотасаҡтар. Барыһы ла йылы хәтирә генә булып ҡаласаҡ. Шулай булыуы хәйерлелер ҙә...

* * *

Ашау байҙан, үлем Хоҙайҙан, тигән һымаҡ, ашауҙары, ысынлап та, буштан булып, хөкүмәткә бер тинлек тә хеҙмәт күрһәтмәй ятһа ла, бынан ҡасыу уйы бер минутҡа ла Рәүефтең башынан сыҡманы. Ишекте асып, дүрт яғың ҡибла, тип әйтеүҙәрен көтөү мәғәнәһеҙлек ине хәҙер. Күпме ваҡыт үтте, береһенең бер кергәне юҡ, ниңә килтереп япҡандарының сәбәбен аңлатыусы, ғәйеп тағыусы ла юҡ. Билдәһеҙлек - иң ауыр яҙа. Әллә тамам онottолар, әллә тәүҙә шулайтып рухтарын һындырырға самалайҙар, белмәҫһең. Телефоны һүнде, яҙған талаптарына һаман яуап бирмәйҙәр. Тимәк, үҙенә, үҙҙәренә бер сараһын табырға кәрәк. Тик нисек, ни рәүешле? Берҙән-бер юл - баҙҙы ҡаҙыу. Ул фекер Рәүефтең башына тәүге көндәрҙә үк ингәйне-инеүен, тик һаман тотона алмай ҙа ҡуя. Йорттоң ҡайһы мөйөшөнән ҡаҙырға? Ишек яғынан ярамай - аңлашыла, баҡсаға ҡараған ике стена ла - вышка күҙәтеүе аҫтында. Бер яҡ ҡына ҡала. Бура ултырған бетон нигеҙ ер өҫтөнән ярты метр самаһы бейеклектә, ер аҫтында ла шул самалыр, күберәк булмаһа. Ана шул бетон аҫтынан үтеп, һаҡсы йөрөгән маршруттан ун -ун биш метр уҙып ергә ҡалҡырға тура киләсәк. Шунан да кәм ярамай, сөнки вышканан күренәсәк, унан килеп, "ҡара ҡарға" йөрөп ята. Уйылып төшмәһен өсөн алға хәрәкәт иткән һайын таяуҙар менән терәтеп барырға тура килер әле, өҫтәүенә.

Рәүфә тәүҙә Рәүефте оҙаҡ уйлауҙа ғәйепләгәйне, ошо хаҡта яңынан һүҙ ҡуҙғатҡайны, ҡурҡты ла киттесе. Бәй, үҙең әйттең дәһә, тигәс, берауыҡ өндәшмәй торҙо, унан, булашма, күңелем һиҙә: оҙаҡ тотмаҫтар, йонсоуың ғына булыр, тине. Рәүеф, үҙ сиратында, йәнә, был мине сығармаҫҡа самалай, һаман мәғлүмәт һауа, шпионлыҡ итә, тип уйларға мәжбүр булды.

- Көтөп ултырыу үлемгә тиң. Бөтөнләй сығармаһалар?

- Быға тиклем нишләп ултырҙың һуң? Мин килгәйнем, ҡаҙам да ҡаҙам... Ҡаҙ!

- Бәй, һине көттөм, - Рәүеф шаяртырға маташты.

- Улай булмай ул. Ҡасан да иҫтәренә төшөрөрҙәр. Мин, тикшерәләрҙер, справка-фәлән йыяларҙыр, кәрәкле кешеләрҙән һорашаларҙыр, белешәләрҙер, тип уйлайымсы. Кеше - энә түгел. Тейешле мәғлүмәт йыйғас, ултыртып ҡуйырлыҡ бер ниндәй ҙә енәйәт юҡлығын күрерҙәр ҙә бер көн, ишекте асып, сығығыҙ, ғәйебегеҙ юҡ икән, яңылыш япҡанбыҙ, тип әйтерҙәр...

- Ҡалай бер ҡатлы икәнһең дә. Беҙҙең менән бер кем дә шөғөлләнмәй, шөғөлләнһәләр, ғәйеп тағырҙар ҙа күптән судҡа оҙатырҙар ине. Нисә аҙна, ҡакуй аҙна, ай, бер нисә ай ваҡыт үтте, һаҡсынан башҡа берәйһе индеме? Юҡ. Йә яңылыш, йәғни берәйһе менән бутанылар, йә райондан төшөрөлгән разнарядка буйынса ултырттылар. Так что, урыҫ әйтмешләй, спасение утопающих - дело рук самих утопающих.

- Әллә инде, Рәүеф ағай. Кешенең исем-фамилияһы, про-

пискаһы, йәшәгән ере, эше, күршеләре бар, ауылы, районы һәр ҡайҙа теркәлгән. Шулай булғас, ул нисек юғалырға тейеш? Мине ирем, һине ҡатыныӊ, исмаһам, улар барыбер эҙләйҙер бит?

- Эҙләйҙер эҙләмәйсә. Тик беҙҙең бында икәнде улар ҡайҙан белһен? Ул мәғлүмәт бер ҡайҙа ла юҡ, бер кем дә әйтмәйәсәк уларға. Бындай учреждениеларҙың барыһы ла, хәрби частар кеүек, номер-һандар менән йөрөтөлә, ә уны юғары етәкселектәге бер нисә кешенән башҡа бер кем дә белмәй.

Рәүфә өндәшмәне, тәҙрә аша ҡайҙалыр текәлгән килеш шымтайҙы. Бер килке Рәүеф, был туңбашҡа нимә тип аңлатамдыр инде, аңлайһы кеше түгел, тип уйланы.

- Утыҙ етенсе йылда миллион-миллион кешене әлегеләй төндә алып китеп япҡандар. Япҡандар ҙа, йүнләп тикшереп тә тормай, атҡандар. Уларҙы 60-сы йылдарҙа ғына аҡланылар. Береһенең дә ғәйебе юҡ. Беҙҙең менән дә шул тарих ҡабатланыуы бар.

- Атырҙар микән ни шулай? - тип һораны Рәүфә, ҡурҡып.

- Бик ихтимал. Шуға, давай, мин ҡаҙайым, һин тәҙрәнән ҡарап ултыр - "ҡара ҡарға" күренеү менән хәбәр бирерһең. Ул ингәнсе, миңә баҙҙан сығып, ҡапҡаһын ябып өлгөрөргә кәрәк.

Баҙ стенаһы бер ҡат кирбес менән уратылғайны, тупраҡ убылып ҡойолоп тормаһын, тигәндәрҙер. Йылыны ла һаҡлай. Кирбес стенанан бетон нигеҙгә тиклем метр ярымлап барҙыр. Тимәк, нигеҙгә барып етеү өсөн генә лә кирбес стенаның бер өлөшөн аҡтарырға, унан ерҙе соҡорға тура киләсәк. Нигеҙҙең ер аҫты өлөшөнөң күпме икәнен белеп булмай, бәлки, ярты метрҙыр, күберәк тә булыуы ихтимал. Өй ҙур бит. Һабы яртылаш һыныҡ көрәк менән кирбескә төрткөләү бер һөҙөмтә лә бирмәне. Унан Рәүеф кирбес стенаны үҙенә тартып ҡараны, һелкенмәгәс, этәрҙе - ҡуҙғалырға уйламаны ла. Цементты йәлләмәгәндәр. Емереү өсөн кувалда, кирбесен берәмләп аҡтарып алам тиһәң, ломфәлән кәрәк. Ә ул ҡоралды ҡайҙан алаһың? Ихатаға сыҡҡанда һиҙҙермәй берәй нәмә генә тотоп кермәһәң. Әммә унда бер нәмә лә таба алманы Рәүеф. Ағас бар, тимерҙе һиңә кем әҙерләп ҡуйһын? Тапҡан хәлдә лә, "ҡара ҡарға"нан йәшереп индерә алмаҫ ине. Шуға ла ул ярҙамға Рәүфәне саҡырҙы. Икәүләп тартҡайнылар, стенаның бер өлөшө емерелеп төштө, саҡ өҫтәренә ишелмәне.

Тупраҡ ныҡ баҫылған, етмәһә, дымлы, көрәк саҡ-саҡ керә. Әҙләп кенә соҡоған тупрағын Рәүеф, йыйылып китеп, йөрөгәндә ҡамасауламаһын өсөн, баҙҙың икенсе мөйөшөнә ырғыта барҙы. Иртәнге сәйҙе эсә лә төшә, Рәүфә төшкөһөнә ашарға саҡырғансы хәл ала-ала соҡоуын белә. Тирләй, устарының тиреһе ҡабарып-һыҙырылып төштө, биле, аяҡ быуындары талды.

Бер көн, ниһайәт, нигеҙҙең аҫтына төшөп етте. Һөҙөмтә төҫмөрләнһә лә, эшләүе ҡыйынлашты: ҡырҡҡа бөгөлөп, көрәк осона эләккән еүеш тупраҡты, хәҙер инде балсыҡты, боролоп артына ырғытыуы ифрат йәпһеҙ. Яйлап уныһына ла күнекте, һәм мөйөштәге тупраҡ өйөмө ҙурая барҙы, ҙурая барҙы. Ә Рәүфә был эшенән уны һаман тыя, юҡ менән булаһың, берәй ҡасан сығарырҙар әле, ана, машиналары йөрөп тора, берәйһе туҡтар ҙа алып китер, тип өгөтләй. Ләкин башлаған эшен Рәүеф туҡтата алмай инде. Кистәрен, сәй эсеп алғас, Рәүфәнең шул туралағы хәбәрен йә уйынға һабыштыра, йә сәйәси тотҡондарҙың әлеге ише ябай ағас йорт түгел, нигеҙенән ҡыйығына тиклем таштан һалынған ҡәлғәнән ҡасҡандарына тарихтан миҫалдар килтерә. Бындай һөйләшеүҙәрҙән һуң Рәүфә уйға ҡала, күңелһеҙлеккә бирелә, илап та ала, юҡтан ғына мәрәкә табып көлә лә... Шулай көн артынан көн үтә тора. Өй эргәһенән элек-кесә ауыр машиналар уҙа, төнөн уратып һаҡсы йөрөй, һирәкләп булһа ла урмандан сыҡҡан йә-ки урманға ингән кешеләрҙе күреп ҡалалар.

Бер мәл "ҡара ҡарға" өс көн ашарҙарына индермәне. Астан ҡырҡылдырырға булдылар, ахыры, тип аптыраштылар тәүҙә, унан ҡурҡыуға ҡалдылар. Индергән ризыҡты Рәүфә былай ҙа самалап тотона ине, шуға ла запастары етте әлеге өс көнгә, дүртенсе көнөнә һыуҙан башҡа бер нәмә лә ҡалманы. Һаҡсы бишенсе көнөнә генә пәйҙә булғас, Рәүеф түҙмәне, әйтте:

- Астан үлтерергә булдығыҙмы?

Һаҡсы өндәшмәне, дөрөҫөрәге, ишетмәмешкә һалышты, сепрәк сумканың эсендәген йомро өҫтәлгә бушатып, сығыу яғына боролғас:

- Мин - һаҡсы, нимә килтерәләр, шуны индерәм, - тине ҡырыҫ ҡына.

- Тимәк, онотмаһындар өсөн начальствоны иҫкәртеп торорға кәрәк. Беҙ мал түгел, улар һымаҡ уҡ кеше. Әгәр улар әҙәм икән...

Ишек төбөндә уны махсус көтөп торған Рәүеф артындағы ултырғысты алып һелтәп ебәрҙе. Әммә һаҡсы тотҡондоң ниәтен алдан һиҙендеме, бесәй етеҙлеге менән ултырғыстан ялтанып өлгөрҙө лә ни аралалыр суҡмарҙай ҙур йоҙроғон тотҡондоң эсенә килтереп тә төрттө. Төртөү ифрат ҡаты булды, Рәүеф һынған кеүек уртаға бөгөлдө, эсен тотоп иҙәнгә ҡоланы. Ҡолап барғанда оҙон ҡара плащтың салғыйҙары ярғанат ҡанатылай елферләп киң йәйелеүен, ултырғыстың иҙәнгә бәрелеп ватылыуын шәйләне. Рәүфә әсе итеп ҡысҡырып ебәрҙе, шарт итеп ишек ябылды, йоҙаҡ бикләнде...

* * *

Тупраҡты көрәктең осо менән генә алһа ла, эше яйлап барҙы. Мәктәптә балаларға йыш ҡына, белем алыу - энә менән ҡойо ҡаҙыу, тигән әйтемде ҡабатлай торғайнылар. Бында белем алыу юҡ, булғанын юғалтмаһаң, бик һәйбәт, ә бына "энә менән ҡаҙыу" тигәне бик тә тура килә. Ай, ауыр бөксәңләп тә туңҡаңлап соҡоуы! Соҡорҙан сығарғаныңды баҙ өҫтөнә ырғытыуы ла ҙур эттәлек. Ҡабаланып йә онотолоп китеп уяулыҡты ла юғалтырға ярамай, үтә һаҡ булашырға кәрәк: "ҡара ҡарға" кергеләп тора, өй уратып та йөрөп ята. Рәүефтең күҙ ҡарашынан, үҙ-үҙен тотошонан, хатта һөйләшеүенән шикләнеүе бар, иҙәндә ятып ҡалған тупраҡ, сүп-сар, баҙ еҫе, тирле кейеме уны шулай уҡ хыянатсыл рәүештә "һата" ала.

Бер көн иртәнсәк эшен дауам итеү өсөн төшһә, нигеҙҙең бер нисә урындан, үрмәксе ауы шикелле, тирә-яҡҡа ярылыуын шәйләне. Кистән улай түгел ине, уныһын Рәүеф теүәл хәтерләй. Тимәк, нигеҙ бигүк ҡалын түгел. Йә иҫкерә, йә йорт ауырлығына түҙә алмай сүгә. Ҡаҙыуҙың касафаты ла булыуы ихтимал.

Ике көндән һуң йәнә ғәжәпкә ҡалды: соҡоп, бетон аҫтына төшкәйне, тупраҡ еңел сыға башланы! Рәүефтең уйынса, ерҙе ҡалын бетон ҡатламы баҫып торғас, тупраҡ, киреһенсә, тығыҙ баҫылып ятырға, шунлыҡтан тағы ла ауырыраҡ соҡолорға тейеш ине. Бер яҡтан яҡшы, сөнки эше еңелләште, хәҙер икенсе ауырлыҡ килде: сығарған тупраҡты өҫкә, баҙ эсенә, ырғытыуы ҡыйынлашты. Ҡырҡҡа бөкләнеп аҫҡа эйелә, бөксәнләп, тубыҡланып көсхәлгә көрәк осо менән аҡтара ла өс бөртөк дымлы тупраҡты алюмин сеүәтә менән һоҫоп өҫкә һирпә. Бына ҡайҙа ул балаларға әйткән "энә менән ҡойо ҡаҙыу!"

Бер кис нигеҙҙең өҫтән аҫҡа ҡарай ҡыҫҡа ғына ярығы иртәнсәккә күҙгә күренеп оҙонайҙы, киңәйҙе, әйтерһең дә, ярыҡты төн эсендә кемдер нимә менәндер ҡайырған. Ҡаҙа килә, ул һаман киңәйә, оҙоная барҙы, нигеҙҙең башҡа урындары ла сатнаны. Бер көн уның көрәге ниндәйҙер ҡаты нәмәгә төртөлдө. Рәүеф тәүҙә, йә фундаменттан кителеп төшкән бетон, йә нигеҙ ҡорғанда ырғытылған таш киҫәгелер, тип уйланы. Аптырап, туҡтарға мәжбүр булды, икеләнде, шунан йәнә төрттө, был юлы ныҡыраҡ итеп. Теге әйбер әллә һынды, әллә ярылды - көрәге төпкә үк инеп китте. Эйелеп, баяғыны тартып сығарғайны - һөйәк. Кеше һөйәге! Ҡурҡышынан саҡ ҡысҡырып ебәрмәне. Сәстәре үрә тороп, арҡаһы буйлап һалҡын зымбыр үтеп китте. Ул көн эшен дауам итә алманы. Ҡурҡты.

Төнөн оҙаҡ йоҡлай алмай ятып, таң һыҙыла башлағас ҡына серемгә китеп бара ине, теге төндәгесә, урман яғынан ауыр гөрһөлдәү ишетте лә, тороп, тәҙрәгә ҡапланды. Урман ситенән йонсоу аттарға атланып, күрәһең, төнө буйы киләләр, әллә күпме хәрбиҙәр төркөмө китеп бара, улар артынан мисәүле ат егелгән оҙон арба, арбаны оҙатып - йәнә бер төркөм һыбайлы. Арбала әллә тимерҙән, әллә нәҙек ағастан яһалған ситлек, ситлек эсендә кеше һыны шәйләнә. Ул арба хәрәкәте ыңғайына бәүелә, сайҡала. Аяҡ-ҡулы бығаулы, тимер бығауҙар сыңлап китә. Тотҡондоң кейеме генәһе лә йыртыҡ-йортоҡ, тәнендә селтәр кеүек һәленеп тора...

Был ни хәл, әллә, теге төндәге кеүек, йәнә күҙемә күренәме, тип Рәүеф күҙҙәрен йомғолап, ҡул һырты менән һыпырғылап алды, әммә арыған һалдаттар, йонсоған аттар, ситлеккә бикләнгән кеше һыны юғалманы. Ышанды ла, ышанманы ла был күренешкә. Тәүге ваҡиғаны һөйләгәс, үҙен көлкөгә ҡалдырған Рәүфәне уятырға ла ниәтләнде, уятһа, йә барыбер күрмәҫ, йә кешеләр юҡҡа сығыр, тип кире уйланы.

**(Дауамы бар).**

## ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишерелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# КӨР ТАУЫШЛЫ БУЛЫУ ҘА -

## заман талабы

**Зәйтүнә ШӘРИПОВА, филология фәндәре докторы, профессор:** Мәғлүмәт саралары киңәйгән, төрләләнгән заманда әҙәбиәт үҙ позицияһын юғалта бара, киләсәктә ул булырмы, юҡмы, тигән һорау бөгөнгө әҙәбиәт ғалимдарын, белгестәрен, шулай уҡ мине лә бик ныҡ борсой. Сөнки әҙәбиәт - ул халыҡты тәрбиәләүсе, әйҙәүсе, өйрәтеүсе, тура юл күрһәтеүсе төп көс икәнен таныйбыҙ һәм уны был йәһәттән алыштырыр башҡа сара юҡлығын да беләбеҙ.

Ғәҙәттә, әҙәбиәттең киләсәге проблемаһы күтәрелгәндә әҙәби әҫәрҙәрҙең кимәле, ижади көстәрҙең үҫеше хаҡында һүҙ бармай. Бында китап уҡыусыға бәйле факторҙар беренсе планға сыға. Уҡыусыны йәлеп итеү - бөгөнгө әҙәби процеста иң көнүҙәк мәсьәлә. Сөнки әҙәбиәтте уҡыусының китапҡа ылығыу шарттары, мөмкинлектәре йәшәтә, ә уның насар йәки яҡшы, сифатлы йәки сифатһыҙ булыуы түгел. Бөгөн әҙәби әҫәр һөйөүселәрҙең кәмеүе уларҙың башҡа мәғлүмәт сығанаҡтарына ылығып китеүенә бәйле. Шуға күрә хәҙер әҙәбиәтселәр уҡыусы өсөн көрәштә ошо сығанаҡтар менән ярышып алып барырға тейеш булып сыға. Был йәһәттән беҙҙең яҙыусылар әле көсһөҙ булыуын билдәләргә кәрәк. Сөнки әүҙем яҙышҡан һәм әҙәби процестың йөҙөн билдәләгән олораҡ быуын ижад итеүҙең яңы технологияларын әле үҙләштереп бөтмәгән. Бында мин иң тәүҙә интернет селтәрендә аралашыу, үҙ ижадыңа йәштәрҙе йәлеп итеүҙе күҙ уңында тотам. Тимәк, үҙ-үҙеңде рекламалау, халыҡтың иғтибарын йәлеп итеү өҫтөндә эшләргә кәрәк. Әҫәрҙе яҙыу түгел, ә уны тәҡдим итеү сараларын күреү етмәй беҙҙең әҙәбиәткә. Әлбиттә, йәштәр был йәһәттән әүҙемерәк. Ижад өлгөләрен интернет селтәренә лә ҡуялар. Өфө урамдарының береһендә байтаҡ ваҡыт "Ул һеҙҙе иң мауыҡтырғыс әҫәре менән йәлеп итәсәк", тигән ҙур иғлан эленеп торғайны. Беҙҙең өсөн ғәҙәти булмаған бындай алым күптәрҙе, бәлки, ысынлап та таныш булмаған әҫәр менән ҡыҙыҡһыныуға этәргәндер?

Икенсе яҡтан, сәйәси нигеҙҙәр үҙгәреү менән әҙәбиәттең роле лә үҙгәрҙе хәҙер. Әҙәбиәт дәүләт иғтибарынан ситтә булғанға, йәштәр табыш килтермәгән ижадты үҙенең төп эше итеп һайламай. Әммә беҙҙең өсөн фәһем алырлыҡ, өйрәнерлек миҫалдар бар. Мәҫәлән, Ҡаҙағстандың йәштәрҙе дәртләндереү буйынса алып барылған эштәре, сәнғәт өлкәһенә инвестициялар йәлеп итеүе билдәле. Шулай уҡ Татарстан республикаһында әҙәби ижадты, сәнғәтте, ғөмүмән, татар мәҙәниәтен үҫтереүгә иҫ киткес ҙур иғтибар бүленеүен беләм. Боронғо яҙмаларҙы өйрәнер өсөн бер төркөм йәштәргә хатта хөкүмәт бинаһындағы бүлмәләр биреп ҡуйғандар. Беҙҙә мәғариф өлкәһендә барған реформаларға һылтанып, уҡытыу сәғәттәрен кәметеү барһа, унда, киреһенсә, бюджет аҡсаһы иҫәбенә "Татароведение" тигән специальность асҡандар.

Кешегә һәр ваҡыт, бигерәк тә компьютер, телевизор, виртуаль донъя заманында, үҙен ишеттереүе, борсоған хистәрен уртаҡлашыусыны табыуы ауыр. Оратор-мотиватор тигән һөнәр бар икән. Ул һөнәр эйәһе матур һүҙҙәр менән кешене ылыҡтыра, күңелен күтәрә, дәртләндерә. Яҙыусыларҙың бурысы - тап ана шул оратор-мотиватор ролендә сығыш яһау, ижад итеүҙер. Был йәһәттән әҙәбиәттең функцияһы, йәмғиәттә тотҡан урыны алыштырғыһыҙ. Шуға күрә лә әҙәбиәт ниндәй генә миҡдарҙа, сифатта булмаһын, бер ваҡытта ла юғалмаясаҡ, тип уйлайым.

**Мөнир ИҠСАНОВ яҙып алды.**

✓ ***Әгәр ҙә һатыусыларҙың хеҙмәтләндереүе, супермаркеттағы тәртиптәр оҡшамаһа, ялыуҙар кенәгәһенән һорап алығыҙ йә булмаһа был хаҡта Роспотребнадзорға мөрәжәғәт итегеҙ.***



ИНТЕРНЕТТАН



## КОМПЬЮТЕРҘЫҢ... һыуға тәьҫире бар

■ Яңыраҡ үткәрелгән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, машинаны хәүефле йөрөтөүселәр башҡаларға ҡарағанда депрессия менән йышыраҡ яфалана. Психик стресс, хәүеф тойғоһо, депрессия һәм алкоголизмдың бер-берене менән бәйле булыуы быға тиклем иҫбатланған булған. Хәҙер ғалимдар кеше кисергән стресс һәм уның машина йөрөткәндә даими рәүештә үҙенең ғүмерен хәүеф аҫтына ҡуйыуы араһында бәйләнеш эҙләй. Тест һөҙөмтәләре күрһәтеүенсә, хәүефһеҙлек ҡағиҙәләрен инҡар итеүселәр араһында стресс кимәле ысынлап та юғарыраҡ була. Был һөҙөмтә бигерәк тә ҡатын-ҡыҙ водителдәргә күберәк ҡағыла. Тимәк, машина руле лә кешенең психикаһына ҙур зыян килтерә ала, ти тикшеренеүҙәрҙең етәксеһе доктор Скотт-Паркер.

■ АҠШ-та үткәрелгән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, ҡарбуз атеросклероз үҫеше хәүефен кәметә. Кентукки университеты сысҡандарҙа һынау үткәреү өсөн уларға юғары холестеринлы аҙыҡ ашатҡан. Шул уҡ ваҡытта бер төркөм сысҡандарға ҡарбуз һуты эсергәндәр, икенселәре ябай һыу эскән. Һигеҙ аҙна үткәндән һуң ғалимдар сысҡандарҙың ауырлығын үлсәгән һәм килеп сыҡҡан һөҙөмтәләрҙе сағыштырған. Ҡарбуз һуты эскән сысҡандарҙың ауырлығы кәмерәк, уларҙың ҡан плазмаһындағы холестерин кимәле лә әҙерәк булған.

■ Көньяҡ Кореяла урынлашҡан Оҙон ғүмер университеты ғалимдары үткәргән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, асығыу йәки ашауҙы ныҡ сикләү ғүмерҙе оҙайта икән. Улар белдереүенсә, организмға туҡлыклы матдәләр етешмәгән ваҡытта ҡанда холестерин кимәле генә түгел, инсулинға оҡшаш үҫеү факторы (IGF-1) тип йөрөтөлгән гормон да түбәнәйә. Был гормон организм өсөн зыянлы түгел, хатта файҙалы ла, ул туҡымаларҙың яңырыуында ҡатнаша. Әммә уның кимәле артып китһә, ул беҙгә ҡаршы эшләй башлай, сөнки ҡартайыуҙы тиҙләтә. Шул уҡ ваҡытта, асығыу файҙалы булһа ла, алдан табиптар менән мотлаҡ кәңәшләшергә кәрәк, тип иҫкәртә был асышты яһаған ғалимдар.

■ Испания һәм Италияның бер төркөм ғалимдары раҫлауынса, баҡса еләге экстракты ҡояш нурланышынан һәм ҡояшта бешеүҙән һаҡлай. Был яһалма юл менән үҫтерелгән тирелә тикшерелеп ҡаралған, алдан тирене ультрафиолет нурҙарында нурландырғандар. Баҡса еләге экстракты менән эшкәртелгән тирелә күҙәнәктең һаҡланыу көстәре әүҙемләшкән, асыҡланыуынса, ул яман шеш йәки ялҡынһыныуға килтереүсе процестарҙан да һаҡлаған. Ғалимдар фекеренсә, баҡса еләгенең дауалау көсө антоциан тип йөрөтөлгән ҡыҙыл пигменттарҙа икән - тап улар ялҡынһыныуға ҡаршы һәм антиоксидант һөҙөмтәгә эйә.

■ Компьютер эргәһендә туҡланыу файҙа килтермәй - Киевтың Кеше экологияһы институты тикшеренеүселәре ошондай фекерҙә. Михаил Курик етәкселегендәге бер төркөм ғалимдар компьютер менән кесә телефондарының организмға тәьҫирен тикшереп, улар эргәһендә ашарға ярамай тигән ҡарарға килгән. Баҡтиһән, неҫкә электромагнит тулҡындары тәьҫире аҫтында ризыҡ үҙенең сифаттарын үҙгәртә икән. Тәүҙә иң түбән электромагнит тулҡындар тәьҫиренән дә молекула структураһын үҙгәртергә һәләтле һыу быға тиҙерәк бирешә. Шуға ла аҙыҡ-түлекте телефондарҙан һәм компьютерҙан йыраҡыраҡ торға кәңәш итә улар.

АЛДАЙҘАР!

**Элегерәк магазиндарҙың буш, бөтә нәмәнең талон, танышлыҡ буйынса ғына бирелеүен иҫләһәң, ул хәлдәрҙең ысын булыуына ышаныу ла килмәй китә. Шуныһы ғәжәп, колхоз-совхоздар гөрләп торғанда, баҫыу-ҡырҙар иген, киң яландар мал менән тулы булғанда, бар кеше хөкүмәт эшенән бушамағанда, ни өсөн магазин кәштәләре шалтырап ултырҙы икән? Ҡыҙыҡ өсөн шул замандың берәй кешеһен бөгөнгө супермаркеттарға индереп ҡарарға ине. Әйбер күплегенән күҙҙәре ҡамашып, алыр нәмәһен дә ала алмай, башы буталыр ине, моғайын. Ысынлап та, эшһеҙлек, аҡсаһыҙлыҡ тип күпме генә һөйләһәләр ҙә, бөшмәк кеүек таралған төрлө магазин селтәрҙәрендә элек төшкә лә инмәгән нәмәләр һатылыуына хайран ҡалырлыҡ. Аҡсаң ғына булһын, күгәрсен һөтөн дә һатып алырға була хәҙер. Тик… Уларға инеп, тауар һайлағанда ла арыҫландай көсөң, төлкөләй хәйләң булыу кәрәк шул. Ошо супермаркеттар, гипермаркеттар тирәһендә генә һүҙҙе ҡуйыртһаҡ та, әҙәм балаһының кеҫәһенән таҡырайтыу өсөн ниндәй генә алымдар булмауын күрергә була.**

# ШАУЛЫ САУҘА...

## бурҙы йәшерер



### Супер хәйлә һәм алдыҡтар

Эш эш менән, ләкин шуның араһында тормош көтөргә лә кәрәк бит әле. Быны өсөн һәр кәрәк-яраҡ артынан магазиндарға сабырға тура килә. Был йәһәттән инде зарланаһы юҡ. Кәштәләре шыплап тултырылған, һәр әйбере уңайлы, күренеп торорлоҡ итеп урынлаштырылған магазинға икмәккә генә тип инһәң дә, алырға уйламағанын да бер юлы теләп сығаһың. Ғәжәп, магазин хужалары шундай шарттарҙы халыҡҡа уңайлы булһын өсөн тыуҙырамы, әллә башҡа берәй хәйләләр ҙә бармы бында? Супермаркетҡа инеү менән иң тәүҙә рәт-рәт теҙелеп киткән кәштәләр күҙгә салына. Әлбиттә, был кәштәләр урын экономиялауҙан шулай тар һыҙ аралыҡ ҡалдырып теҙелмәгән. Һатып алыусының аҡсаһын күберәк алып ҡалыу өсөн махсус урынлаштырылған улар. Ни өсөн тигәндә, тар рәттәр араһынан үткәндә, кеше, кәрәкһә-кәрәкмәһә лә, тирә-яғына ҡарана, ялтырауыҡлы стикерҙарға, тауарҙарға күҙ һала, башҡаларҙың ҡайҙа ҡарауын, нимә алыуын күҙәтә һәм шул арала алырға ла уйламаған берәй нәмәне кәрзиненә һалып та ҡуя.

### Яҙылғанға ғына ышанма

Магазинда нәҡ ошо ҡағиҙәнән сығып эш итеү яҡшы. Сөнки махсус рәүештә хаҡтарҙы буташтырып ҡуйыуҙары ла бар. Мәҫәлән, банандың хаҡы 35 тип яҙылған ҡағыҙ тора, ә кассала түләнгән чекта уның килограмы 47 һум булыуы асыҡлана. Йә булмаһа, 150 һумлыҡ колбаса урынына 250 һумлыҡты һалып, осоҙлоһон төпкәрәк тығыуҙары ла бар. Был хаҡта ризаһыҙлыҡ белдерһәң, шунда уҡ иң төптә ятҡан осоҙло колбасаны күрһәтеп, иғтибарһыҙ булыуҙа ғәйепләүсәктәр. Ә банандың хаҡы тура килмәүенә дәғүәләшһәң, хаҡтарҙы яңынан тикшергән булып, яңылышлыҡ китеүе йә иһә яңы хаҡтарҙы ҡуйып өлгөрмәүҙәренә аҡланасаҡтар. Ә бит бөтә кеше лә дәғүә белдереп, хаҡ тикшереп тормай. Кемеһелер ашыға, икенсеһе уңайһыҙлана, ә өсөнсөләре иһә был хаҡта белмәй ҙә ҡала.

### Акциялар һәм ташламалар

Хаҡтарҙың түбәнәйеүе хаҡында ла әленән-әле гәзиттәрҙән уҡып, телевизорҙан күреп торабыҙ. Былдай саралар, ғәҙәттә, һатып алыусыларҙы күберәк йәлеп итеү өсөн үткәрелә. Ә инде акция менән һатылған арзанлы тауарҙың күбеһенсә яраҡлылыҡ ваҡыты сығып барған була һәм улар иң алғы рәттәрҙә, төҫлө этикеткалар менән тәҡдим ителә. Был тауарҙар бөгөн бер һумға арзаныраҡ икән, тимәк, ул йә үтмәгән тауар, йә иртәгә уның һатыуға яраҡлылығы тамамланасаҡ. Тик акцияларҙың сираттағы алдыҡ икәнен генә барыһы ла аңламай, сөнки урамдарға, магазин эсенә эленгән сағыу рекламаларҙағы ташламалар күбеһенсә дисконт карталы клиенттарға ғына икәнлеге хаҡында бер һүҙ ҙә әйтелмәй. Нисәләр һумын экономиялау өсөн, осоҙ хаҡҡа алданып, ҡала违 бер башынан икенсеһенә тиклем килгән кеше, әлбиттә, нимә булһа ла һатып аласаҡ. Был осраҡта һатыусыларҙы аҡса ғына ҡыҙыҡһындырыуы ла сер түгел. Ғәҙәттә, былдай магазин селтәрҙәрендә паровоз принцибы менән эш итергә тырышалар. Йәғни, төп тауар - иң уртаға, "алтын" рәткә, ә уның ике яғына бөтөнләй файҙаһыҙ бер нисә тауар ҡуйыла. Мәҫәлән, ҡиммәтле, элиталы сыр иң уртала, ә эргәһендә - глазурланған сыроктар, пудингтар һ.б. Сыр алған кеше, һис шикһеҙ, сәйгә тип бер юлы сырок, пудингтарын да эләктерәсәк.

### Артыҡ түләнгән аҡсалар

Супермаркеттарға бигерәк тә асыҡҡан көйө инеү кәңәш ителмәҫ ине һәм бында баҙарҙан да ныҒыраҡ алдашҡандарын иҫтә тотоу кәрәк. Ас кешенең башын бутау бигерәк тә еңел. Ундайҙар тышына көнбағыш майы һөртөп ялтыратылған балыҡ, колбаса, хатта сырҙарҙы ла бер шикләнеүһеҙ кәрзиненә тултырасаҡ, иң өҫкә һалынған тауарҙың срогы сығыуын да күрмәйәсәк. Шуныһы ҡыҙыҡ, күп осраҡта һатып алыусы үҙенең алданғанын һиҙмәй ҙә ҡала. Әйтәйек, пенопласт һауытҡа телеп һалынған ҡыйбатлы сервелат алғанда уның хаҡына кәрәкмәгән һауыт ауырлығы ла инеүен берәү ҙә башына килтермәй. Был хаҡта уйланып торорға уның ваҡыты ла юҡ. Ә инде бушҡа түләнгән аҡсаларҙы иҫәпләп сығарһаң, бөләкәй генә грамдарҙан да магазин хужаһына күпме килем килеүен яҡшы самаларға була. Ғөмүмән, һауыттарға телеп һалынған ризыҡты ныҒыраҡ тикшереү кәрәк.

### Касса эргәһендә...

Тулы кәрзин һөйрәп, касса алдына килеп баҫҡанда ла кассирҙың намыҫлы булыуына ышаныс юҡ әле. Алған әйберең ни тиклем күберәк, чегың ни тиклем оҙонораҡ, алданыу хәүефе лә шул сама була, сөнки үҙ кеҫәһен ҡайғыртыу йәһәтенән кассир ҙа өлгөрлөк күрһәтеп ҡалырға тырыша. Быны өсөн намыҫһыҙҙар төрлө юлдар ҡуллана: һеҙҙең иғтибарһыҙлыҡтан файҙаланып, бер йогурт урынына икәү, илле һум урынына йөҙ һумлыҡ чек үткәреп тә ебәрә ала. Үтә сосораҡтары иһә, тауарҙың штрих кодын сканер аша үткәргәндә, программаның бер нисә секунд ҡына пассив хәлдә тороуын да оҫта файҙаланып ҡалырға тырыша. Был осраҡта машина барыбер ҙә сигнал биреп пипелдәйәсәк, ә тауар чекһыҙ үтәсәк. Магазинда йөрөгән һаҡсылар ҙа бәйләнерлек, һатып алыусы ла һиҙерлек түгел. Ә һуңынан мәшәҡәтһеҙ генә һатылған тауарҙы юҡҡа сығарырға, йәғни аннулировать итергә лә була. Оҙон сират тороп касса алдына килеп еткәнсе, алған әйбереңең хаҡын түгел, кәрзиненә нимә тултырғанын да оноҡҡан һатып алыусы компьютер менән эшләгән һатыусының алдауын башына ла индермәйәсәк. Нисек инде, ул бит һәр әйберҙең компьютер аша үткәнен ҡарап, сигнал тауышын ишетеп тора. Бында бер нисек тә алдашып булмай, тип уйлай ул һәм тыныс ҡына артыҡ аҡсаһын түләп, сығып китә.

### Алданып ҡалмау өсөн...

Әлбиттә, тәү сиратта үҙеңә уяу булыу, тауарҙың яраҡлылыҡ срогын яҡшылап ҡарау, хаҡтарҙың дөрөҫ булыуына ышаныу һәр касса алдынан китмәй генә иҫәптең дөрөҫлөгөн тикшереү мотлаҡ. Күп әйбер алған осраҡта һәр кем үҙе менән кеҫә калькуляторы йөрөтһә, тағы ла яҡшыраҡ буласаҡ, сөнки хәүефһеҙлегеңде үҙең ҡайғыртмаһаң, быны һинең өсөн берәһе лә эшләмәйәсәк.

Әгәр ҙә витринала түбән хаҡ күрһәтелеп, кассала ҡыйбат һораһалар, һеҙ тауарҙы витриналағы хаҡ менән һатыуҙарын талап итә алаһығыҙ. Шулай уҡ, һеҙ яңылыш ҡына боҙоп йә төшөрөп ебәргән тауар өсөн дә түләргә тейеш түгелһегеҙ. Әгәр ҙә һатыусыларҙың хеҙмәтләндереүе, супермаркеттағы тәртиптәр оҡшамаһа, ялыуҙар кенәгәһенән һорап алығыҙ йә булмаһа был хаҡта Роспотребнадзорға мөрәжәғәт итегеҙ.

Эйе, бөгөнгө ығы-зығылы, шаушыулы заманда һәр кем нисек булдыра, шулай йәшәргә тырыша. Кемдер башҡалар иҫәбенә анһат ҡына кеҫәһен ҡалынайтһа, икенселәре үҙенең асыҡ ауыҙлығы, вайымһыҙлығы арҡаһында хәләл тиндәренән дә ҡолаҡ ҡаға. Быларҙы күреү өсөн әллә ҡайҙа ситкә йөрөү ҙә кәрәкмәй, ә үҙебеҙҙәге супермаркеттарға инеү ҙә етә. Һуңғы ваҡытта кешеләр уңайлы ла, осоҙло ла тип ошо магазин селтәрҙәренә йөрөргә тырыша. Быны шунда саҡ ҡына иғтибарлыраҡ булһаҡ, витринала - бер, кассала икенсе хаҡ икәнен, алынған тауарҙы берәү урынына икәү итеп үткәрергә тырышыуҙарын, күп кенә тауарҙың срогы сығыуын да күрергә булыр ине. Бында инде һатып алыусының үҙенән тора: башҡаларҙың оятһыҙ рәүештә кеҫәңә төшөүенә юл ҡуйһың икән, тимәк, һин ғүмер буйы үҙеңде алдауҙарына ла ирек бирәһең.

**Эльза МӨХӘМӘҘИЕВА.**

ҠЫҘЫҠ ТАҺА!

# КӨЛДӨРӘ ЛӘ, УЙЛАНДЫРА ЛА...



## Иң бысраҡ урындар ҡайҙа?

Барыһы ла урамдан ингәс, бигерәк тә йәмғиәт урындарында булғандан һуң, ҡулды ныҡлап йыуырға кәрәклеген белә, сөнки бысраҡ ҡулдар күп төрлө ауырыуҙарға килтерергә мөмкин.

Ҡыҙыҡлы факт: ауылда, урманда йәки дачала ҡалаға ҡарағанда бысраҡтан зыян күреү кимәле күпкә түбән. Ҙур ҡалаларҙағы магазин, транспорт, мәктәп һәм башҡа йәмәғәт урындары кеше организмы өсөн хәүефле булған микробтар өсөн үтә лә уңайлы "йәшәү" урыны икән.

Шулай уҡ ғалимдар офистарҙағы иң бысраҡ урындарҙы ла асыҡлаған. Төрлө инфекцияларҙың иң күп тупланған урыны булып бәҙрәф һәм ундағы крандарҙың тотҡалары тора. Унан һуң микротулҡынлы мейестәрҙең һәм һыуыткыстарҙың ишек тотҡалары килә. Лидерлыҡ исемлеген компьютер клавиатураһы һәм "сысҡан" ослап ҡуя.

Ҡунаҡхана һәм отелдәрҙең дә үҙҙәренә генә хас бысраҡ урындары бар. Улар исемлегенә телевизор пульты, телефон төймәләре һәм ут һүндергес инә. Шулай ҙа, ғалимдар билдәләүенсә, бысраҡлыҡ буйынса йыйыштырыусының биҙрәһе, сепрәге һәм бирсәткәһенә бер нәмә лә етмәй. Йыйыштырыусы бүлмәне тәртипкә килтереүсе генә булып түгел, ә шулай уҡ бер урындан икенсеһенә хәүефле бактерияларҙы күсереүсе ролен дә үтәй.

Үҙ йортонда ла кеше бактерия һәм микроорганизмдарҙан азат түгел. Фатирҙағы иң бысраҡ урын булып, күптәр иҫәпләгәнсә, бәҙрәфтәге унитаз түгел, ә ағас турағыс таҡта тора икән. Тикшереүҙәр күрһәтеүенсә, унда унитазға ҡарағанда 200 тапҡырға күберәк бактерия йәшәй. Бысраҡлыҡ буйынса икенсе урында телефон тотҡаһы тора. Шулай уҡ был исемлекте һауыт-һаба йыуыу өсөн губка, душ пәрҙәһе һәм кухнялағы сүп-сар һауыты тулыландыра. Һауыт-һабаны, кер йыуыу машиналары ишектәрен дә төрлө микробтар үҙ итә.

Алда әйтелгәндәрҙе иҫәпкә алып, кешенең усын да был исемлеккә индерергә мөмкин. Быны иҫбатлау өсөн Америка ғалимдары тикшереү уҙғарған. Улар 51 студенттың ҡулын тикшергән һәм уларҙың ҡулында 4,5 меңдән артыҡ төрлө бактерия йәшәүен асыҡлаған.

## Иң күбе кем алдай?

Ир-егеттәр ҡатын-ҡыҙға ҡарағанда йышыраҡ алдай икән. Уртаса алғанда ир-егеттәр көнөнә биш тапҡырға күберәк алдаша, а ҡатын-ҡыҙҙарҙа был һан өсәүгә тиң.

Донъялағы 81 процент кеше "зыянһыҙ алдауҙы" көн дә ҡуллана. Иң тараған алдау булып "Минең барыһы ла һәйбәт", "Мин һине яратам" һәм "Юҡ, һин бер ҙә һимеҙ түгел" һүҙбәйләнештәре тора.

65 процент кеше, дөрөҫөн әйтеп, кемдәлер үпкәләтер урынға алдап әйтеү яҡшыраҡ, тип һанай.

Ә 44 процент кеше иһә ниндәйҙер хәбәр һөйләгәндә бер аҙ арттырып ебәреү бары тик яҡшыға ғына, сөнки был әңгәмәне ҡыҙыҡлыраҡ итә, тип иҫәпләй.

Һәр кеше ғүмеренең 60 йылында уртаса 88 мең тапҡыр алдай, тип һанала. Ләкин бер туҡтауһыҙ алдаған кешеләр ҙә була һәм был ауырыу Мюнхгаузен синдромы аҫтында билдәле. Шуныһы ҡыҙыҡлы: алдауға кеше генә түгел, хатта шимпанзе һәм горилла ла әүәҫ икән.

## Ҡара бесәйҙән кем ҡурҡа?

Социологтар уҙғарған һорау алыуҙар, Рәсәй граждандарының 15 проценты төрлө ырым-юрауға, күрәҙәлек итеүгә һәм астрологияға ышаныуҙарын асыҡлаған.

Ырым-юрауға һәм күрәҙәлек итеүгә ышаныусылар араһында иң әҙен - 8 процент - 65 йәштән олораҡтар тәшкил итә. Шул уҡ ваҡытта 24 йәшкә тиклемгеләр араһында юлды ҡыйып үтеүсе ҡара бесәйҙән йәки буш биҙрәле ҡатын-ҡыҙҙан ҡурҡыусылар һаны күберәк - 24 процент.

Ҡатын-ҡыҙҙар ир-егеттәргә ҡарағанда ышаныусанраҡ, йәғни, ярашлы рәүештә, был һан 19 һәм 10 процентҡа тигеҙ.

Тағы ла балалары булмаған ғаиләләр араһында яҙмышҡа һәм күрәҙәлек итеүгә ышаныусылар һаны 20 процент булһа, ике балаһы булған ғаиләләрҙә был һан 13 процентҡа тиң.

Географик урынға бәйле миҫалдарҙы ҡарағанда иһә, үҙ тормошон йондоҙҙарға ҡарап билдәләүселәр һаны Төньяҡ-Көнбайыш һәм Урал федераль округтарында күберәк (23 һәм 22 процент). Ә бына Үҙәк, Көньяҡ һәм Төньяҡ федераль округтарында йәшәүселәрҙең бары тик 9-10 проценты ғына астрологтар кәңәшенә ҡолаҡ һала. Хөрәфәттәргә ышаныуҙар буйынса Мәскәүҙә йәшәүселәр һәм ауыл халҡы араһында айырма юҡ тиерлек (10 һәм 12 процент). Ә ҙур булмаған ҡала һәм ҡасабаларҙа йәшәүселәр араһында иһә был һан күберәк (23 процент).

Тикшереүҙәр дингә ышаныусылар һәм атеистарға ҡағылышлы ҡыҙыҡлы һөҙөмтәләрҙе лә асыҡлаған. Атеистар араһында ышаныусылар һаны әҙ - 9 процент. Шулай уҡ мосолмандар ҙа төрлө ырым-юрауға һәм күрәҙәлеккә бик үк ышанып бармай (5 процент). Ә бына сиркәүгә йөрөүселәр араһында уларҙың һаны күберәк - 16 процентты тәшкил итә. Аллаһ бар, тип таныусылар, ләкин үҙҙәрен бер ниндәй ҙә конфессияға индермәгәндәрҙең һәр бишенсеһе хөрәфәттәргә ышана (20 процент).

Ә ырым-юрауға, күрәҙәлеккә һәм яҙмышҡа ышаныусылар араһында күпселекте хәйриәлек менән шөғөлләнеүселәр (31 процент), граждандыҡ активистары (30 процент) һәм үҙ эшен яңы башлаусы эшҡыуарҙар (29 процент) тәшкил иткән.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Әле генә һөйләнгән хәлдәр, факттарҙы укығас, һеҙ, әлбиттә, ултырып иламаныңыҙ, ә көлөп кенә ҡуйҙығыҙ, шулай бит? Эйе, һәр ваҡыт көлөп йәшәргә кәрәк! Ә һеҙ беләһегеҙме, әгәр ҙә кеше 100 тапҡыр көлһә, был велосипедта 15 минут йөрөүгә тиң икән. Велосипедта һәр кем йөрой алмай, быға ваҡыты ла юҡ. Ә бына көлөүҙе ни уны һәр кем булдыра ала. Энергиялы көлөү йөрәк ритмын арттыра, тын алыу йышлығын тәрәнәйтә. Көлөү шулай уҡ эндорфин барлыҡҡа килтерә, ә был, үҙ сиратында, баш мейеһенең кислород менән күберәк тулыланыуына килтерә. Тағы ла көлөү рак һәм төрлө шештәр барлыҡҡа килтереүсе ҡайһы бер күҙәнәктәргә "һөжүм" итеүсе иммун күҙәнәктәрен көсәйтергә лә һәләтле икән. Көлөп йәшәйек!**

УҢЫШ ҠАҘАН

# ЫСЫН ТОРМОШҠА СӘЙӘХӘТ

## Оҙаҡ йәшәүҙең биш көнсығыш сере

**2. Танау аша алмашлап тын алыу.** Был күнекмә меңдәрсә йылдар инде энергетик кимәлде күтәреү һәм мейе, тән, йән өсөн төрлө өҫтәнлектәр гаммаһын алыу маҡсатында ҡулланыла. Бындай күнекмәнән һуң һеҙ еңелсә генә эйфория тойоһо кисерерһегеҙ.

Тыныс урында аяҡтарығыҙҙы салып ултырығыҙ, арҡағыҙҙы тура тотоғоҙ. Ауыҙығыҙҙы ябығыҙ. Уң ҡулығыҙҙың баш бармағы менән уң яҡ танау тишеген ҡаплағыҙ һәм икегә тиклем һанағансы һул яҡ танау тишеге менән тәрән итеп тын алығыҙ. Тын алған ваҡытта күҙҙәрегеҙҙе йомоғоҙ һәм тәнегеҙҙә өрөп тултырылған һауа шары ҙурайып барғанын күҙ алдына килтерегеҙ. Бынан һуң һигеҙгә тиклем һанағансы пауза яһағыҙ һәм шул уҡ ваҡытта һул яҡ танау тишеген дә уң ҡул бармағы менән ҡаплағыҙ. Дүрткә тиклем һанағансы тынығыҙҙы уң яҡ танау тишегенән сығарығыҙ. Артабан уң яҡ танау тишеге менән тын алығыҙ, тынығыҙҙы тотоп тороғоҙ һәм һул яҡ танау тишегенән сығарығыҙ. Был күнекмәне бер эшләгәндә - уң, икенсе тапҡыр һул яҡ танау тишеге менән һәр көн иртән бишәр минут ҡабатлағыҙ.

**3. Насос.** Энергияның бындай тиҙ стимуляторын яуаплы йыйылыш йәки митингыла сығыш яһар алдынан ҡуллана алаһығыҙ. Ултырығыҙ һәм ҡулығыҙҙы эсегеҙгә шар тотҡандағы кеүек итеп ҡуйығыҙ. Кендек тирәһендә эсегеҙгә ныҡ итеп баҫығыҙ һәм танау аша тынығыҙҙы сығарығыҙ. Һуңынан танау менән тәрән итеп тын алып, уны эсегеҙгә тултырығыҙ. Күнекмәне 20 тапҡыр ҡабатлағыҙ һәм үҙегеҙҙе дәртлерәк һәм яҡшыраҡ тойғанда темпты арттыра барығыҙ.

**4. Иртә тороу.** Мейе, йән һәм тән өсөн иртә тандан урманда йәки йылға буйында йөрөүҙән дә файҙалыраҡ нәмә юҡ. Аҙнаһына бер тапҡыр булһа ла. Мәҫәлән, йәкшәмбе иртән быны эшләп ҡарағыҙ. Бындай прогулка мейене тынысландыра, тормош асылына тотороҡло ҡараш булдыра, нимәләр эшләргә кәрәклеген аңғарта. Тормоштоң һәр көнө - байрам. Һәр көн ҡояш ҡалҡыуы - беҙ һаҡларға тейешле байлыҡ. Урамда йөрөгәндә тын алыуығыҙ тәрән булыуын контролдә тотоғоҙ (икегә тиклем һанағансы тын алығыҙ, һигеҙгә тиклем һанағансы тынығыҙҙы тотоғоҙ һәм дүрткәсә һанағансы тынығыҙҙы сығарығыҙ).

**5. "Йәшел томан" тип аталған тәрән итеп тын алыу.** Был күнекмә Көнсығыштың донъя кимәлендәге хәрби сәнғәт мастерҙары тарафынан алыш алдынан үҙҙәрен тынысландырыу һәм көсөргәнештән арындырыу маҡсатында эшләнгән.

Дөрөҫ тын алыуҙың беренсе принцибы үпкәне тултырып тын алыуҙан тора. Дөрөҫ тын алыу бары тик йоҡлаған саҡта ғына башҡарыла, унда үпкәләрҙең өсҡө өлөшө лә, аҫҡы өлөшө лә эшләй.

Тыныс урын һайлап арҡағыҙға ятығыҙ, күҙҙәрегеҙҙе йомоғоҙ һәм уйығыҙҙа ғына: "Мин тыныс, көслө һәм иғтибарым тупланған", - тип ҡабатлағыҙ. Тын алғанда уны ҡуйы йәшел томан итеп күҙ алдына килтерегеҙ. Ул танауығыҙҙан инеп, үпкәгеҙҙе тултыра, эсегеҙгә йүнәлә. Артабан йәшел томан ҡул, аяҡ суҡтарына таралып, бөтөн тәнегеҙҙе ялмап ала. Тынысландырыусы йәшел томан тотош тәнегеҙ буйлап һәр мускулығыҙҙы көсөргәнештән арындырып үткәндән һуң, тынығыҙҙы тупланған көсөргәнеш менән бергә сығарығыҙ. Был күнекмәне тәрән итеп тын алып, көн һайын 5-20 минут ҡабатлағыҙ.

Ошо күнекмәләрҙе 30 көн дауамында эшләп, сәләмәтлегегеҙҙе юғарыраҡ кимәлгә күтәрә алаһығыҙ. Энергетик резервығыҙҙы йәҡоһонан уятып, күпкә өлгәшергә, юғарыраҡ уңыштар ҡаҙанырға, тормошоғоҙҙо ғәҙәтиҙән идеалға әйләндерә алаһығыҙ.

**Робин ШАРМА.**

ӘЙҘӘ, СӘЛӘМӘТ БУЛАЙЫҠ!



# ҮҘ КӨЙӨНДӘ ҮҘЕҢ КӨЙЛӘ

**Асия ҒӘЙНУЛЛИНА, сәсәниә, Сибай ҡалаһы:** һау-сәләмәт булыр өсөн беҙҙә уратып алған донъя, кешеләр хаҡында фәҡәт яҡшы уйҙар ғына уйларға кәрәк. Әлбиттә, донъя булғас, ул төрлөсәгә әйләнеп китә, ләкин барыбер насар хәбәрҙәргә һәм күңелһеҙ күренештәргә әллә ни иғтибар биреп барыу кәрәкмәй. Әйтеүемсә, донъя ҡараңғы булһа ла матур, яҡты булһа ла матур, сөнки уны Аллаһы Тәғәлә бар булдырған, шуға күрә беҙ уның һәр көнө, һәр сәғәте, минутының ҡәҙерен белеп, ниндәй генә хәлебеҙҙә лә үҙебеҙҙә позитивҡа көйләп йәшәргә бурыслыбыҙ.

